*Бер үк ваҡытта әфәнде лә, ҡол да булып булмай. Ҡол булғың килһә, кешеләрҙең һәр береһенә ялағайлан һәм ярарға тырыш, әфәнде булғың килһә инде үҙеңде ошо ҡылыҡтарҙан азат ит.*

*(Эпиктет).*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

16 - 22 МАРТ (БУРАНАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№11 (532)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Беҙ ватанды һаҡлайбыҙ,**

ә айыҡлыҡ - ҡоралыбыҙ




5

**Моң тынмаһа...**

ғаләм мәңге йәшәр



6,9

**Милләт йылъяҙмаһы...**



8-9

ете томлыҡ энциклопедияла теркәлгән

**Гүзәллектең...**

үлсәүҙәре ниндәй?



16

14 ТВ-программа

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Һинең, минең һәм уның тәбиғәткә булған мөнәсәбәтте нисек баһалайһығыҙ?

***Шәүрә МОРАТОВА, Бөрйән районы:*** Беҙҙең районға йыл һайын меңәрләгән турист килеп ял итә. Уларҙың төрлөһө бар: тәбиғәткә һаҡсыл ҡараштә булғаны ла, төкөрөп ҡарағаны ла. Айырыуса ауылдарҙан ҙур ҡалаларға уҡырға барып, "ҡала кешеһе" булып киткән йәштәрҙең ҡыланышына аптырайым. Үҙҙәренең ауыл, райондарында ла тәбиғәт менән шулай ҡырағайҙарса ҡыланалармы икән улар? Моғайын, юҡтыр. Арттарынан ятып ҡалған сүп-сарҙы, туҡталҡалар янында һындырылған ағастарҙы, һыуға ташланған шешәләрҙе, пакеттарҙы күреп, йәштәребеҙҙең ҡыланышы өсөн йән әрней. Оҙаҡламай ял итергә, ошо хозурлыҡта тән һәм йән сихәте алырға уларҙың балалары килә башлар. Ләкин ҡасандыр ата-әсәләре тарафынан ҡыйырһытылған, бысратылған, туҙҙырылған тәбиғәт ҡосағында ял итеү бер ниндәй ҙә ҡыуаныс килтермәҫ.

Шул уҡ ваҡытта икенсе төбәктәрҙән килгән күпселек туристарҙың беҙҙең урман-һыуҙарыбыҙға булған ихтирамлы ҡарашын күреп ҡыуанам. Ни өсөндөр уларға, бәлки, ғүмерҙәрендә тәүге һәм һуңғы тапҡыр килгән урындарын ялтыратып йыйып, бер шырпы бөртөгө лә ҡалдырмайынса китеү бер ниндәй ҙә ауырлыҡ тыуҙырмай, ә йыл һайын тиерлек ошо төбәк ҡунағы булған үҙ милләттәштәребеҙгә был аҙым оло ҡыйынлыҡ булып күренә икән? Һулар һауа, эсәр һыу, ашар аҙыҡ биргән ерһыуға хөрмәт күрһәтеүҙе улар кәмселеккә, түбәнселеккә һанаймы икән әллә, тип тә уйлап ҡуям. Бөгөнгө һәр аҙымыбыҙҙың киләсәктә мотлаҡ ауазы буласағын иҫтән сығармаһаҡ, бәлки, тирә-яғыбыҙға булған мөнәсәбәт тә яҡшыға үҙгәрер ине.

***Марат ҒӘЙНЕТДИНОВ, урман хужалығы белгесе:*** Әлеге ваҡытта республикала өс ҡурсаулыҡ һәм бер милли парк бар. Шулай уҡ 2012 йылда төбәктең айырыуса һаҡланған биш тәбиғәт территорияһы "Башҡорт Уралы" исеме аҫтында донъя кимәлендә танылыу алды һәм биосфера резерваты статусына лайыҡ булды. ЮНЕСКО яҡлауы аҫтындағы "Башҡорт Уралы" составына "Шүлгәнташ" дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы, "Башҡортостан" һәм "Моразым тарлауығы" милли парктары һәм ике зоологик ҡурсаулыҡ - "Алтын солоҡ" һәм "Ыҡ" - инә. Дөйөм майҙаны 345 мең гектарҙан ашыу биосфера резерватын булдырыу оло әһәмиәткә эйә, сөнки беҙҙә кеше дәүләт тарафынан яҡланған һәм һаҡланған урында үҙен әҙәплерәк тота һәм тәбиғәткә оло зыян килтермәй. Был ҡыуаныслы, әлбиттә, ләкин тәбиғәткә ихтирам һәм иғтибар закондан ҡурҡыуҙан түгел, ә күңел төпкөлөнән, йөрәктән сығырға тейеш. Бына шул һөйөүҙе тәрбиәләһен ине балаһында һәр ата-әсә. Мәктәптәрҙә лә тәбиғәткә һөйөү тәрбиәләү буйынса сараларҙы әүҙемләштерһендәр ине.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ИҒТИБАР!*

**25 мартта башҡорт халҡының рухи короле, шәйех Зәйнулла ишан Рәсүлевтың тыуыуына 180 йыл тула. Ошо айҡанлы гәзитебеҙҙең алдағы һанында Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайҙың "Зәйнулла" тигән поэмаһын, төрлө заманда йәшәгән күренекле дин әһелдәренең, ғалимдарҙың Зәйнулла ишан хаҡында әйткән һүҙҙәрен уҡырһығыҙ. Гәзитебеҙҙең алдағы һандарында ла ишандың тормошона, дини эшмәкәрлегенә бәйле мәҡәләләр биреүҙе дауам итәсәкбеҙ. Шуға күрә гәзит уҡыусыларыбыҙҙың ошо шәхескә бәйле мәғлүмәттәрен, иҫтәлектәрен һәм фотоһүрәттәрен редакцияға ебәреүен үтенәбеҙ.**

**Республикала бөйөк шәхесебеҙҙең 180 йыллығына арналған юбилей саралары Өфөлә лә, ишандың тыуған яғы Учалы районында ла, ишандың мәңгелек йорто - ҡәбере урынлашҡан Троицк-Өстамаҡ ҡалаһында ла май айында ойошторола саҡ.**

*ӘЙҘӘ, ФЕКЕРЛӘШӘЙЕК!*

# МИЛЛИ АЛЛЕЯЛАР КӘРӘК...

## "Урал батыр"ға, "Төньяҡ амурҙары"на арнап



Билдәһеҙ бер автор Урал батырҙы ошолай һүрәтләгән. Интернеттан.

**Миллионлы ҡалала ял һәм мәҙәниәт парктары булһа ла, улар тотош халыҡтың ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү өсөн бик аҙ, тиергә мөмкин. Был йәһәттән былтыр Өфөлә Софья аллеяһы һәм Нестеров скверы асылыуы үҙенсәлекле бер ваҡиға кеүек ҡабул ителде. Бында, әлбиттә, Аксаков фонды рәйесе Михаил Чвановтың тырышлығын да, ҡала округы Советы депутаттарының, ҡала округы хакимиәтенең эшмәкәрлеген дә баһаламай булмай. Шулай ҙа Михаил Чвановҡа айырым рәхмәт белдерге килә. Ни өсөнмө? Битарафлыҡ һаҙлығына батырмай, башҡорттарҙа ла милли рух уятыуға, башыбыҙҙа идеялар, яңы хыялдар тыуҙырыуға этәргес биргәне өсөн.**

**(Дауамы 4-се биттә).**

✓ *Шул уҡ ваҡытта был оло йәштәге инәйегеҙҙең күңелендә шом да бар: википедиясылар юҡҡа яфаланмаймы, интернетҡа күпләп вирустар һөжүм итә башлаһа, бөтә мәғлүмәттәрегеҙ ҙә юйылып бөтмәҫме?*



ИШАРА

# ИНТЕРНЕТТАҒЫЛАР...
## параллель донъяла йәшәй һымаҡ

**Гәзитебеҙҙә "Башҡорт Википедия"һы тураһында уҡыным да, ниңәлер, бик күптән ҡараған фильм иҫемә төштө (исемен дә, авторын да онотҡанмын инде). Бик ҡурҡыныс фильм ине ул. Йәшлектә һирәк-һаяҡлап нервыларҙы "ҡытыҡлап" алғым килеп, ҡурҡыныс фильмдар ҡарай торғайным.**

Ул кинола бер ир кешегә, ғәйебе булмаһа ла ғәйеп тағып, төрмәгә ябалар. Ир үҙен аҡлар шаһиттар, дәлилдәрҙе үҙе генә һәм иректә генә эҙләп була икәнен аңлағанға күрә, төрмәнән ҡаса, әммә тотола. Фильмдың аҙағында был ирҙе иң ҡаты режимлы төрмәгә ябалар. Ул төрмә бейек ҡая башында урынлашҡан, ә тирә-яғы тәрән упҡын. Һәр тотҡон айырым, ҡалын бүрәнә стеналы ҡумтала ултыра. Унда ризыҡ бирер өсөн кескәй генә тәҙрә уйылған. Мине иң ныҡ тетрәндергәне шул булды: күҙҙәре генә күренеп торған тәҙрәнән тотҡон ир: "Эй, Хоҙайым, мин бында! Мине юғалтма!" - тип ҡысҡыра. Ул фильмдың аҙағы ошолайыраҡ тамамланды: тотҡон ошо ағас ҡумтаһы менән бергә упҡынға атылды һәм селпәрәмә килгән ҡумтаның бүрәнәләренә тотоноп, көслө ағымлы йылға буйлап ағып китте. Йылға уны ирекле йәшәгән бер илгә алып барып еткерҙе һәм ул ир ғүмеренең аҙағынаса ирекле йәшәне...

Бына был Википедияны ла аҙ һанлы милләттәрҙең "Беҙ бында! Беҙ барбыҙ!", тип ҡысҡырыуына оҡшатам мин. Шул уҡ ваҡытта был оло йәштәге инәйегеҙҙең күңелендә шом да бар: википедиясылар юҡҡа яфаланмаймы, интернетҡа күпләп вирустар һөжүм итә башлаһа, бөтә мәғлүмәттәрегеҙ ҙә юйылып бөтмәҫме, хеҙмәтегеҙ бушҡа китмәҫме?

Шулай ҙа ҡағыҙға яҙылған мәғлүмәт ышаныслыраҡ һымаҡ тойола миңә. Хатта бәләкәй генә бер һөйләм яҙып һалынған ҡағыҙ киҫәге лә күп йылдар үткәс ғүмер китабының бер битен, бер ваҡиғаһын иҫенә төшөрөүе мөмкин. "Культура" каналының "Линия жизни" тапшырыуында бер артист та шул хаҡта иҫкә алып үтте: "Архивымды аҡтарғанда бер ҡағыҙға тап булдым, - тип башлап китте ул. - Ул открыткала, тулҡынланып яҙғанғалыр инде, ауыш-тыуыш хәрефле яҙма һаҡланған: "Ҡәҙерлем, һине әсәй булыуың, ә үҙемде атай булыуым, ҡыҙыбыҙҙың тыуыуы менән ҡотлайым", - тип яҙылған ул ҡағыҙға. Был үҙем яҙған, һарғайып бөткән хатты уҡып, күҙҙәрем йәшләнде. Мин ул йыраҡ көндөң бөтә шатлығын ҡабат кисерҙем. Ул бәхетле мәлдең йылы ла, айы ла, көнө лә теркәлгәйне унда. Ә биш йылдан һуң, икенсегә улыбыҙ тыуғас, ҡатыныма телефон аша СМС-ҡотлау оҙаттым. Ул ҡотлауҙы ҡатыным юйғандыр инде һәм уны ҡабат уҡып та булмаясаҡ..."

Бына шулай. Ҡул менән яҙылғанға барыбер ҙә бер нимә лә етмәй һымаҡ тойола миңә. Мин өлкән быуын булған өсөн, интернет донъяһы ят булған өсөн генә әйтмәйем был һүҙҙәрҙе. Ҡағыҙҙан уҡылған һүҙҙең күҙҙәр өсөн дә, мейе өсөн дә, йөрәк өсөн дә файҙаһы ҙур булыуын ғалимдар ҙа раҫлай һәм был турала "Киске Өфө"лә лә яҙылғайны.

Интернетҡа төбәлеп ултырыусыларға тағы шундай һорау: "Гәзит, журналдар уҡыйһығыҙмы?" Әлбиттә, "Уҡымайбыҙ!" тип яуап бирәсәкһегеҙ. Етмәһә, яуабығыҙҙа бының менән ғорурланыу, ә компьютер менән эш итә белмәгән ололарҙан мыҫҡыллы көлөү ҙә һиҙемләнәсәк. Юҡҡа ғына улай итәһегеҙ. Интернетта нимә уҡығанығыҙҙы беләбеҙ бит беҙ: ундағы дөрөҫлөгө өсөн бер кем дә яуап бирмәгән имеш-мимештәрҙән ауырыуға һабышҡандар тураһында ла ишетеп-күреп йөрөйбөҙ. Шуға ла көсөгөҙҙө, аҡылығыҙҙы илебеҙ, халҡыбыҙ өсөн файҙалы башҡа эштәргә йүнәлтһәгеҙ, яҡшыраҡ булмаҫ инеме икән? Миңә һеҙ параллель донъяла йәшәгән кеүек күренәһегеҙ...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## һинең, минең һәм уның тәбиғәткә булған мөнәсәбәтте нисек баһалайһығыҙ?



**(Башы 1-се биттә).**

***Азат АБДУЛЛИН, ғилми хеҙмәткәр:*** "Тәбиғәтте һаҡлау кәрәк!", "Тәбиғәтте бысратмайыҡ!" һәм башҡа ошондай яңғырауыҡлы лозунгтар күп әйтелә бөгөн, ләкин төптән уйлап ҡараһаң, эш күп һөйләүҙән ары үтмәй. Әлбиттә, тәбиғәтте һаҡлау буйынса бөтә донъя кимәлендә ойошторолған һәм эшләгән ойошмалар бихисап. Улар хәлдәренән килгәнсә экологияны, тәбиғәтте һаҡлауҙы ҡайғырта, һауаға зарарлы матдәләр ташлаған заводтар менән көрәшә, төрлө митингтарға сыға, ҡыҙыу сығыштар яһай. Ә айырым граждандар тарафынан тәбиғәтте һаҡлау бөгөнгө көндә нисек атҡарыла? Мәҫәлән, бик күптәр ниндәй ҙә булһа хайуанды һаҡлауҙы талап итеп сығыш яһай, ләкин шул уҡ ваҡытта үҙенең ихатаһында көн күргән һәм, әйтергә кәрәк, экосистема өсөн мөһим, бәләкәй генә ҡорт хаҡында уйлап та бирмәй. Ошо уҡ ҡарашты үҫемлектәргә ҡарата ла әйтеп була. Минеңсә, тәү сиратта, үҙебеҙҙең аяҡ аҫтындағы ҡорттарҙы һәм үҫемлектәрҙе һаҡлауҙан башланырға тейеш тәбиғәткә һаҡсыл ҡарашыбыҙ. Тәбиғәтте һаҡлау, тигәндә беҙ икенсе ҡитғалағы пальма ағасын түгел, ә, тәү сиратта, эргәбеҙҙәге тал һәм еректе һаҡлауҙы күҙ уңында тоторға тейешбеҙ.

Артабан. Ете диңгеҙ аръяғында үҫкән һәм беҙҙең яҡтарға ситят булған гөл йәки ағас үҫтерергә тырышҡансы, үҙебеҙҙең климатҡа яраҡлашҡандарын ултыртыу күпкә файҙалыраҡ түгелме? "Ҡунаҡ" әллә хушһына беҙҙең яҡтарҙы, әллә юҡ, ә үҙебеҙҙекенә иғтибар күберәк булғанда, планетабыҙҙың йәшел ҡалҡаны булған урмандар күберәк ҡалҡып сығыр ине. Шул уҡ хәл ҡоштарға ла ҡағыла. Иҫебеҙ китеп попугай йә башҡа төрлө ҡоштарҙы һатып алабыҙ, үрсетергә тырышабыҙ, ә шул уҡ ваҡытта ҡолағыбыҙҙы моңло тауышы менән иркәләгән һандуғасыбыҙ, сыйырсығыбыҙ хаҡында онотабыҙ. Ғөмүмән, нимәне булһа ла ситтән килтереү ғәмәленән алыҫыраҡ торорға кәрәк, сөнки был урындағы экосистема балансының боҙолоуына килтерә.

Йыл һайын дарыуға тип әллә күпме үлән һәм емештәр йыйыуыбыҙ ҙа тәбиғәт өсөн эҙһеҙ үтмәй, сөнки беҙҙә үлән йыйыу мәҙәниәте юҡ, ҡомһоҙлоғобоҙға баш була белмәйбеҙ. Кәрәкһә лә, кәрәкмәһә лә, хәлебеҙ бөткәнсе үләндәр йыябыҙ ҙа, уларын ҡулланып та бөтмәйенсә, икенсе йылға тағы ла ҡосаҡ тултырып алып ҡайтып һалып ҡуябыҙ. Иманым камил, күптәрҙең өйөндә йылдар буйы йыйылған тоҡ-тоҡ дарыу үләндәре һаҡлана. Ошомо беҙҙең тәбиғәткә һаҡсыл ҡарашыбыҙ, уға булған хөрмәтебеҙ? Фәҡәт бөгөнгө көн менән генә йәшәүебеҙ, үҙебеҙҙең эгоистик мәнфәғәттәрҙе генә ҡәнәғәтләндереүебеҙ, киләһе көндәргә ҡул һелтәп ҡарауыбыҙ эҙһеҙ үтмәйәсәк. Был хәҡиҡәтте аңларбыҙ, ләкин һуң булып ҡуймағайны, йәмәғәт.

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Мартта 2013 йылдың икенсе яртыһына тәүге ярты йыллыҡтағы хаҡтар менән гәзитебеҙгә яҙылырға була. 50665 индекслы "Киске Өфө"гә ярты йыллыҡҡа яҙылыу хаҡы - 360 һум 24 тин. Ошо айҙа гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән тәүге 10 кеше Ноғман Мусиндың "Алдар батыр" тигән китабына лайыҡ буласаҡ. Кем алыҡ?**



Федоровка районының башҡорт теле уҡытыусылары.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республика Хөкүмәте ултырышында 2012 йылда Башҡортостанды социаль-иҡтисади йәһәттән үҫтереүгә йомғаҡ яһалды. Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов билдәләүенсә, 2012 йылда тулайым төбәк продукты күләме биш процентҡа тиерлек артып, триллион һумлыҡ сикте үткән. Республикала сәнәғәт етештереүе күләме 5,7 процентҡа артҡан.

✓РФ Дәүләт Думаһының Хеҙмәт, социаль сәйәсәт һәм ветерандар эштәре буйынса комитеты беренсе уҡыуҙа бала саҡтан I төркөм инвалидтарына һәм инвалид балаларға социаль пенсия күләмен арттырыу тураһындағы закон проектын ҡабул итергә тәҡдим индерҙе. Закон проекты 2013 йылдың 1 ғинуарынан бала саҡтан I төркөм инвалидтарына һәм инвалид балаларға социаль пенсия күләмен айына 1,5 мең һумдан ашыуыраҡҡа арттырыуҙы күҙ уңында тота. Шулай итеп, ул 7253 һумдан 8704 һумға тиклем артасаҡ. Бөгөнгө көндә бындай пенсияны 764 меңдән ашыу кеше ала.

✓РФ Президентының Волга буйы федераль округындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич ил башлығы ҡушыуы буйынса Волга буйы федераль округы граждандарына дәүләт наградалары тапшырҙы. Тантаналы сара 12 мартта Түбәнге Новгород ҡалаһында үтте. Орден, миҙал һәм почетлы исемдәргә округтың төрлө төбәктәренән 20 кеше лайыҡ булды. Улар иҫәбендә Башҡортостан вәкилдәре лә бар. Оло Ыҡтамаҡ ауылынан педагог Рәйсә Мофазаловаға "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған уҡытыусыһы" исеме бирелде.

✓Башҡортостан Хөкүмәте ҡарамағындағы Йәштәр сәйәсәте буйынса ведомство-ара комиссияһының сираттағы ултырышында йәштәр сәйәсәте мәсьәләләре тикшерелде. Вице-премьер Марат Мәһәҙиев йәштәрҙе патриотик рухта тәрбиәләү мәсьәләләренә айырыуса иғтибар бүлде. Ултырышта шулай уҡ йәштәрҙең финанс белемен арттырыу һәм уларҙы эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеге серҙәренә төшөндөрөү буйынса семинарҙар һәм курстар үткәреү тәжрибәһен йәйелдереү, ауылдарҙа йәштәр менән эшләү буйынса белгестәр әҙерләү өсөн йәйге мәктәптәр ойоштороу һәм үткәреү тураһында ҡарарҙар ҡабул ителде.

КӨН ҠАҘАҒЫ

**Йыл башында Рәсәйҙең Үҙәк Банкыһы 1 һәм 5 тинлектәрҙе ғәмәлдән сығарыу тураһында ҡарар ҡабул иткән. Был турала телевидение аша еткерҙеләр, гәзит-журналдарҙа яҙып сыҡтылар. Ни тиклем ҡыҙғаныс: кесә төбөндә сылтыраһалар ҙа, шул аҡса йораттары күңелгә тыныслыҡ, йәнгә һиллек бирә ине бит әле, инде шул ҡыуаныс һәм йыуаныстан да яҙҙырырға булғандар. Йәнә ошо хәйерсе тиндәре өсөн бил бөгөп, шуларға тилмереп ҡарап, күҙ төбәп тора инек тә баһа. Ул тиндәр әйләнештән алынғас, уҡытыусыларға, медицина, мәҙәниәт, редакция хеҙмәткәрҙәренә ниндәй аҡса менән эш хаҡы түләрҙәр икән? Бына эштәр ҡайҙа бара һәм нисегерәк тора!**

# БАҠЫР АҠСАҒА...

## маҡтау йыры

Үҙәк Банк аҡланыу сараһын да тапҡан: был кампанияны үткәрерҙән алда ил халҡына мөрәжәғәт иткәндәр, һәм һорау алыусыларҙың 67 проценты, ваҡланыу етте, тиндәрҙе бөтөрәйек, тип тауыш биргән, йәнәһе лә. Бәлки, ул тауышты айына 50-100 меңдән күберәк эш хаҡы алғандар биргәндер, кем белә. Нимә генә тимә, ваҡ аҡсаны әйләнештән алыу яҡшыға түгел, был инфляцияның арта барыуының билдәһе, кире һөҙөмтәһе. Әлеге мәлдә 5 тинлекте һуғыу өсөн 72 тин, ә 1 тин етештереү өсөн юғарылағы һандан саҡ ҡына аҙыраҡ сығым сарыф ителә икән. Бына ҡайҙа яткан икән дә баһа финанс тап килмәүҙәренең, аҡса етмәүҙең тамыры, ә беҙ ошоға ҡәҙәр шуны ла белмәй йөрөгәнбеҙ.

Аҡса етмәй, тигәндәй, Мәскәү һынлы Мәскәүҙәге бер оло түрәнән миллиардлап аҡса таптырып ыҙалаталар, ҡат-ҡат һорау алыуға саҡыртып йонсоталар, ә теге, үҙ сиратында, үсеген, саҡырыуҙарға килмәй инәлтә, ти. Ышанғы килмәй, халыҡты ҡайғыртҡан абруйлы етәксе нишләп кенә бурлыҡ юлына төшһөн дә дәүләт милкенә ҡул һуҙһын? Беҙ бит юғарылағыларҙы һәр ваҡыт яратабыҙ, хөрмәт итәбеҙ, уларға мөкиббән китеп ышанабыҙ, сөнки был ҡылыҡ бәләкәйҙән беҙҙең ҡаныбыҙға һәм аңыбыҙға һеңгән. Размол (бойҙай, арыш, кукуруз, борсаҡты бергә ҡушып әүәләнгән он) икмәк менән һыйлаған Н.С. Хрущевты ихтирам иттек, шунан бихисап тапҡырҙар Герой яһап, түшенә 182 орден-миҙалдар тағып, Л.И. Брежневты күктәргә ашырып маҡтаныҡ, ҡалғандары бик йыш алышына башлағас, уларын яратып өлгөрөп булманы. Урлашыуға ҡарата тапҡыр әйтелгән бер мәҡәл дә бар: "Енәйәт өҫтөндә тотолмаған бур түгел!" Әгәр, шулай икән, бөгөн был мәҡәлде икенсерәк итеп тә әйтеп була: "Рәхәтләндерел, ваҡланып тормай, күмәртәләп, вагон-вагон итеп урла, тик тотолма ғына, шул ваҡытта һинең абруйың да һаҡланыр, йәҙең дә яҡты, саф булыр, һәм түрә ҡәнәфиендә ултырыуыңды ары ла, оҙаҡ йылдар дауам итерһең!" Әлләниндәй иләмһеҙ оҙон мәҡәл килде лә сыҡтысы, йә, ярай инде, гәйепләмәгеҙ, бөгөн беҙ бит оҙон һөйләйбеҙ ҙә үтә ҡыҫҡа эшләйбеҙ.

Юғарылағылар, ишетеп белеүемсә, шыпа ла урлашмай, ә бына беҙҙең эргәлә йөрөгән бәгзе берәүҙәр дәүләт елкәһенән кимереп кимерәләр, хужалыҡыбыҙҙы бөлдөрөп-бөлдөрәләр, һинә әйтәйем, ярай әле хоҡуҡ һаҡлау органдары уларҙы ваҡытында фашлап, күрегеҙ, ғибрәт алығыҙ тип иҫкәртеп, хатта әркәтөп, гәзел яҙаһын биреп тора. Бына яңыраҡ ҡына бер фермер хужалығындағы малсы ярты тоҡ ярманы сәлдереп тотолған. Хәҙер инде иҫәпләгеҙ, һәр ауыл һайын ярты тоҡ урлаһындар әле, шул "һул" ға киткән ярма-кәбәкте ил буйынса ҡушып, бер урынға өйһәң, тау ҡәҙәре килеп сыға түгелме? Ҡот осҡос күренеш! Малсы, урланым, хата миндә, тип әйтә ти, тимәк, ул бур һәм уғры, ә бына Мәскәүҙәге шылғаяҡ түрә тотолмаған, тоҡлап-тоҡлап урлаган аҡсаһын берәү белмәй ҙә, күрмәгән дә, тимәк, уға һис кем бинахаҡка гәйеп тә таға алмай. Бына күрерһегеҙ әле, бер ярты йылдан уны тулыһы менән, башҡаса бәйләнеп йөрөмәҫлек итеп аҡлап, алдында бөгөлөп-һығылып гәфү үтенәсәктәр, тағы бер ышыҡ ергә тәгәйенләп, йомшаҡ урынға ултыртып ҡуйыуҙары ла бик ихтимал. Тик уның рәнйегән күңеле яҙылырмы, беҙгә ышаныс ҡалырмы, ҡыйырһытылған кеше бар донъяға үс итеп, хаслыҡка, урлыҡка тотонһа, миллиард урынына триллионға үрелһә? Ярай, ул триллион тигән нәмәне тотоп ҡарамағас, белмәйбеҙ ҙә, кәрәге лә юҡ, ысынын ғына әйткәндә, йәл дә түгел, ә күҙ алдындағы ярманың тәләфләнеүе, кәбәктең ситкә осоуы эсте бошора. Әҙәм балаһының тапҡанына мөрхәтһенә белмәүенә аптырайым. Нимәгә икән уға миллиард? Уны үҙе генә түгел, бер нисә быуыны ла тотоноп бөтә алмаясаҡ бит. Минеңсә, әҙәм балаһына был донъяла күп кәрәкмәй, уға ете төшөнсә лә етә: иман, сәләмәтлек, именлек, ҡот, бәрәкәт, мөхәббәтле булыу һәм шөкөр итә белеү. Беҙҙә, йәғни, Йылайыр районының Һабир ауылында Әхмәзулла Түләшев исем-шәрифле олатай йәшәй торғайны. Ул "Зиһенле булһаң - аңла, төшөнмәйһең икән - һинең хәсрәт" тип, кинәйәләп, уратып, һырттан һуҡтырып һөйләргә яратты, әллә нишләп ҡапыл ғына шул олатай иҫкә килеп төштесө... Бигәйбә, ситләштем, төп әйтеремә ҡайтайыҡ.

Аҡсаларҙы сүплеккә ырғытыуҙың тағы ла бер сәбәбе бар, йәнәһе лә, шул тиндәрҙең һатып алыу ҡеүәте самалы, самалы ғына түгел, ундай хаҡтағы тауарҙар кәштәләрҙә бөтөнләй юҡ икән. Быныһын да белмәбеҙ һәм аңлайбыҙ. Тағы мин шуға шөбһәләнеп ултырам бит әле: әгәр ҙә сират 10 һәм 50 тинлектәргә етһә? Ул сағында ни ҡылырбыҙ, бөтөнләй бөлөп ҡалырбыҙ бит. Хәйер, быныһын арттырыңҡырап ебәрҙем буғай, беҙ бит нинде генә шарттарҙа көн итмәнек тә, ниндәй генә ҡоролошта йәшәп ҡараманыҡ: социализмында яҡынлы телмәрҙәр һөйләнек тә ҡыҙыл байраҡтар болғаныҡ, аҙаҡ " ура" ҡысҡырып, үҙебеҙ ҙә аҙағынаса төшөнөп етмәгән коммунизм тигән нәмәне төҙөп аҙапландыҡ, үҙгәртеп ҡорабыҙ тип, "Миңлебай" ағай менән яңылыштан ғына тотош бер ҡеүәтле илде тарҡаттыҡ һәм емерҙек, Рәсәйебеҙҙе башҡа дәүләттәр алдында бахыр һәм хәйерсе хәлендә ҡалдырҙыҡ. Хосусилаштырыу һылтауынан йылғырҙар ил байлығын үҙләштерҙе, ә ярлы-ябаға иһә ваучерға алданды, бөгөн килеп ең һыҙғаныып, дәртләнеп, Ҡытай аламаһы, Американан ебәрелгән тауыҡ боттары менән һатыу итеп (ни тиһәң дә, быны баҙар шарттары талап итә), ыҙғағай капитализмға ынтылып ятҡан көн.

Аҡсаның да ниндәйен генә тотоп ҡараманыҡ. 90-сы йылдар башында эре генә итеп миллиондарҙы ырғытып, арзанлы нәскә, сылғау, осһоҙ күлдәк-ыштан һатып алған мәлдәр әле лә хәтерҙә. Бөгөн килеп, доллар, евро, тип күҙҙәр тона, хәйер, ул валюталар беҙҙең ҡараштҡа эләгер, тишек кеҫәләребеҙгә оялар нәмәләр түгел инде. Аҡса хисаплауҙар йәһәтенән томанараҡ булғанға микән, мин гел шулай уйлайым: нишләп шул сит-яттарҙың аҡсаһына баш әйәбеҙ һуң, беҙҙең үҙебеҙҙең аҡсабыҙ, һумыбыҙ бар түгелме? "Калын елкәләләр" дәүләт тамғаһы һуғылған аҡсабыҙҙы мыҫҡыл итеп "деревянный", "не конвертируемый" тип тә ебәргән булалар, ә беҙ кеҫәбеҙ тулы шул "ағас"тар булһа, иҫебеҙ китеп ҡыуаныр инек әле...

Элек аҡсаның ҡәҙере барыбер юғарыраҡ ине: бер ҡап шырпы 1 тин, маркаһыҙ конверт - 1 тин, дәфтәр - 2 тин, көндәлек тотолған тоҙ - 6, "Урал" мотоциклы -1200, "Москвич" автомобиле 7000 һум торҙо. Араҡы эсеүгә хирестәр бер шешә "Московская"-ны 2 һум 87 тингә һатып алып, ләх булғансы эсеп, тинтәкләнеп йөрөнөләр (эскелек ул осорҙа аҙ ине барыбер, ауыл һайын икә-өс кешенән артманы, хәҙерге ише түгел). Әйтһән, ышанмаҫтар, ирәүәнләгәнбеҙ бит хөрриәттә, хаҡтарҙың арттарына тибеп көн иткәнбеҙ. Әсәйем участка дауаханаһында ашнаҡсы булып эшләп, айына 89 һум 99 тин ала торғайны. Ни тиклем сабырһыҙланып көтһәк тә оҙаҡ йылдар хөкүмәт шул аҡсаны "түңәрәкләргә" теләмәне, финанс, иҡтисад бүлектәрендә, бухгалтерияларҙа шул тиндәрҙе самаһына килтереп, дебет-кредит яһап ултырғандарҙыр инде. Ни тиһәк тә, бөтә урындарҙа ла иҫәп-хисап булған, тиндәрҙең ҡәҙерен, баһаһын белгәндәр.

Ғаилә бюджетынан айына минә, артыҡ та түгел, кәм дә түгел, 20 тин бүленә. Шул аҡсаға дүрт тапҡыр балалар сеансына кино ҡарарға бара алам. Ә ул кино тигән нәмәне, хәйерһеҙ, көн һайын тиерлек күрһәтәләр. Көнөң шул тауыҡтарға ҡала инде, бер киноға иңеү өсөн ике йомортка кәрәк, теге аҙғындар иһә минә кәрәк нәмәне ояға түгел, ҡасып һалалар, йөрө инде кесерткәндән сағылып, баҫыу буйында темеҫкенеп-соҡоноп. Бәхетле, хәр, үҙенә күрә етеш йәшәгәнбеҙ ул заманда, сөнки өмөт йөрөгән күңелдә, бәләкәй генә тиндең дә баһаһы, ҡәҙере ҙур булған.

Хәҙер теге тиндәр бөтөрөлгәс, хаҡтарҙы мотлаҡ "түңәрәкләйәсәктәр", тик әлегә билдәһеҙ, кемдең файҙаһына булыр был эш, һатып алыусының файҙаһынамы, әллә киреһенсәме? Бына мин, мәҫәлән, бөгөнгә алыпһатарҙарҙы аңларға, хатта ҡайһылыр кимәлдә кисерергә тырышам, ләкин ул йылғыр һәм әрһеҙ әҙәмдәргә тамсы ла ышанмайым. Кисәһен эш хаҡының артыуы тураһында телевизорҙан хәбәр итеүҙәре була (шул һөйөнсөнө ишетеп, төн йоҡламай пландар ҡороп хыялланып сығаһың), иртән таң менән ярлыҡтағы хаҡтар һинең күтәрелгән эш хаҡынан ике тапҡырға артып та өлгөрә, үт өлгөрәләр бит әй, үт эшләйҙәр!

Заманалар үҙгәрә, алыпһатарҙар һимерә, бизнесмендар ҡалыная, ямғырҙан һуң ҡалҡҡан бәшмәктәр ише арта барған миллионерҙар май кикерә, тиндәр тарихҡа күсеп, хаҡтар "түңәрәкләнә". Ә минең ғәмемдә фиҙаҡәр хеҙмәтенә гәҙел булмаған тиндәр алып көн иткән ябай халыҡ, сөнки улар йәшәтә дәүләтте, улар кейендерә, йылындыра һәм ашата, йорттар төҙөй, ҡылғанын яҡшыға юрап хәләл тирен түгә. Ауыл кешеһе Рәсәйҙең эреле-ваҡлы ҡалаларын туйындыра, әпәкәйле итә, ә ҡайны берәүҙәр, ауыл кәрәкмәй, тип фәлсәфә һатҡан була. Фәлсәфә һатып ҡына ҡуйһа ҡана ла һуң...

Мин бит ер балаһы, ауыл хәлен ишетеп түгел, күреп беләм, күреп кенә ҡалмайым, һәммәһе йөрәк аша үтә, сәсте ағарта, ауыл менән тағы ла 10-15 йылдан нимә булыр, тигән шөбһәле уй баштан сыҡмай. Милләттең бишеге лә баһа ауыл, әҙәбиәтебеҙҙең, мәҙәниәтебеҙҙең, телебеҙҙең сығанағы, рухыбыҙҙың ҡәгбәһе! Әгәр халыҡты тиндәр менән сағыштырһаң, улар "һуҡыр тиндәр" түгел, "алтын тиндәр", быны мин ихластан әйтәм. Күпселекте төшкил иткән ябай халыҡтың көнитмеше түңәрәкләнһә ине, донъяһы бөтөн булһа ине, тип теләйем. Ниндәй генә шарттарҙа йәшәһәк тә, барыбер күңелдә киләсәккә өмөт сатҡыһы йөрөтәбеҙ, бәлки, йәшәүҙең мәғәнәһе лә шундалыр...

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2011-2015 йылдарға Урал арьяғын иҡтисади йәһәттән үҫтереү буйынса урта сроклы комплексы программа тейешле темптар менән тормошҡа ашырылмай, тип иҫәпләй Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов. Билдәләнеүенсә, был төбәктә һаман да эш урындары етешмәүе, халыҡ мәшғүллеге кимәленең түбән булыуы һәм халыҡтың башҡа төбәктәргә күпләп китеүе күҙәтелә. Шул уҡ ваҡытта күрелгән саралар ярҙамында һуңғы ике йыл эсендә Урал арьяғында 2500 яңы эш урыны булдырылған. Шуға ҡарамаҫтан, Сибайҙан тыш, төбәктең башҡа районларында эшһеҙлек кимәле уртаса республика күрһәткестәренән юғарыраҡ булып ҡала.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Урал арьяғында тиҙ арала хәл итеүҙе көткән мәсьәләләр араһында Башҡортостан Президенты Сибай һөт-консерва комбинатында ("Урал арьяғы продукттары" ябыҡ акционерҙар йәмғиәтендә) килеп тыуған хәлде атаны. Бөгөнгә көндә әсә һөтөн алмаштырған эсемлек етештереү буйынса был предприятиеның эшмәкәрлеге туҡтатылған, 220 хеҙмәткәр эшенән бушатылған. Рөстәм Хәмитов фекеренсә, комбинатты һаҡлап ҡалырға кәрәк.

✓Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленең художество етәксеһе итеп Башҡортостандың халыҡ артисы Филүс Ҡаҙаҡбаев тәғәйенләнде. Филүс Хәсән улы Ҡаҙаҡбаев 1971 йылда Ейәнсура районында тыуған. Башҡорт хореография училищеһын, Силәбе дәүләт мәҙәниәт һәм сәнғәт академияһын тамамлаған. 1992 - 2011 йылдарҙа Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамблендә эшләй. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы ҡарамағындағы Мәҙәниәт буйынса йәмәғәт советы ағзаһы.

✓Башҡортостанда балаларҙы беренсе класҡа алыу өсөн ғаризалар ҡабул ителә башланы. БР Мәғариф министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, ҡаланың барлыҡ мәктәптәре билдәле адрестарға һәм микрорайондарға беркетелгән. Фаразланыуынса, быйыл республикала 43 меңдән ашыу бала беренсе класҡа бара.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Идара итеү компанияларында булған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөп, ҡайтанан иҫәп-хисап эшләү буйынса күрһәтмәләр бирелгән. Өфөләләргә 2012 йылда 7,5 миллион һумдан ашыу аҡса кире ҡайтарылған.*



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БЕЛЕМ АЛЫРҒА...

## ҡасан да һуң түгел

**Белемһеҙ берҙе йығыр, белемле меңде йығыр, тип юҡҡа ғына әйтмәгән ата-бабаларыбыҙ. Заман шундай ҙур тиҙлек менән алға бара, ҡайһы бер ваҡытта бөгөнгө йәштәр эргәһендә үҙенде сабый бала рәүешендә тойоп китәһең - улар беҙгә ҡарағанда күберәк мәғлүмәтлерәк. Бында инде йәштәрҙән нисәлер аҙымға артта ҡалыуыбыҙҙы танып, белемде камиллаштырырға ғына ҡала. Ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Әлфирә Баҡыеваның ҡулланыусылар хоҡуҡын яҡлау буйынса үткәргән матбуғат конференцияһы белемде камиллаштырыуға бер ҡасан да һуң түгел икәнен тағы бер раҫланы. Бигерәк тә хоҡуҡтарыңды белеү һәм уны яҡлау өлкәһендә.**

Өфө ҡала округы хакимиәтендә 1998 йылда ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса махсус бүлек ойошторола һәм уның белгестәре ошо йылдар дауамында граждандарға консультациялар биреү, уларҙың хоҡуҡтарын аңлатыу буйынса эҙмә-эҙлекле эш алып бара. Былтыр ғына баш ҡалала граждандарҙан 8500 мөрәжәғәт, шул иҫәптән 1300-ө - яҙма рәүештә, ҡабул ителә. Мөрәжәғәттәрҙең яртыһы тиерлек сауҙа өлкәһендәге эшмәкәрлеккә ҡағылғанлыҡтан, ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау бүлеге белгестәре һәр шишәмбе һайын ҙур сауҙа комплекстарына ("Меркурий", "Тополь", "Өфө", "Радуга", "Октябрьский", "Мир", "Семья") сығып, күсмә консультациялар үткәрә. Бынан тыш, килешеү сиктәрендә тикшереүсе органдар, Өфө ҡалаһының Торлаҡ хужалығы идаралығы МУП-ы менән берлектә, айына бер тапҡыр урындарға сығып, бәхәсле хәл-торошто асыҡлай. Шундай тикшереүҙәр барышында, мәҫәлән, торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә түләү квитанцияларына ноябрҙә газондарға һыу һибеү өсөн тотонолған сығымдар индерелеүе асыҡлана. Шулай уҡ йәрминкәләр ваҡытында ауыл хужалығы продукцияһын килтереп һатыусылар араһында намыҫһыҙ сауҙагәрҙәрҙең эшмәкәрлегенә тиҙ юл ябыла. Ҡулланыусыларҙың хоҡуғын яҡлау бүлеге белгестәре, гәҙиттә, бәхәсле хәл-торошта йәлаусы ролен ала һәм шул сәбәпле хоҡуҡ боҙоу осраҡтарының 70 проценттында эш судҡа еткерелмәй, ике яҡтың килешеүе менән тамамлана. "Ҡулланыусы һәр ваҡыт хаҡлы, тигән әйтем булһа ла, ҡайһы берҙә ҡулланыусы ла хаҡлы булмауы мөмкин. Ҡайһы бер ваҡытта улар ҡулланыу инструкцияһын уҡымай, шул сәбәпле алған әйберенә зыян килтерә. Хатта алған әйберен яуыз ниәт менән боҙоусылар ҙа осраштырғылай, - ти Әлфирә Миңнулла ҡыҙы. - Бындай ваҡытта инде беҙ ике яҡ өсөн дә файҙалы булған юлды ҡарайбыҙ".

Һуңғы ваҡытта мөрәжәғәттәр коммуналь хеҙмәттәр күрһәтеүҙең яңы ҡағиҙәләре ғәмәлгә инеүгә бәйле арткан. Граждандар тарифтарҙың юғары булыуына, квитанцияға йорт алды газондарындағы үсентеләргә һыу һибеү, подъездарҙы йыуыу өсөн тотонолған һыу күләменең индерелеүенә ҡәнәғәтһеҙлек белдерә. Һәр осраҡта түләүҙәрҙең ни сәбәпле артыуы асыҡланып, идара итеү компанияларына булған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөп, ҡайтанан иҫәп-хисап эшләү буйынса күрһәтмәләр бирелгән. Барлыҡ ошо эшмәкәрлек һөҙөмтәһендә дөйөм алғанда өфөләләргә 2012 йылда 7,5 миллион һумдан ашыу аҡса кире ҡайтарылған.

Әйткәндәй, хоҡуҡи белемдәрҙе камиллаштырыу йәһәтенән Өфө халҡы ҙур өҫтөнлөккә эйә. Әле "Өсөнсө быуын халыҡ университетының ҡулланыусылар клубы"н ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул ителгән. Уның маҡсаты - оло йәштәгеләргә хоҡуҡтары боҙолған осраҡта уны үҙ аллы яҡларға, дәғүәләрҙе грамоталы яҙырға, ниндәй хоҡуҡ нормаларын ҡулланырға өйрәтеү. Шулай уҡ бары тик Өфөлә һәм ҡала округы райондарында ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау бүлеге белгестәре граждандарҙы бушлай ҡабул итә, уларға консультациялар үткәрә, ярҙам ҡулы һуҙа. Ҡаҙанда, Силәбелә бындай структуралар бөтөнләй юҡ.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ӘЙҘӘ, ФЕКЕРЛӘШӘЙЕК!

# МИЛЛИ АЛЛЕЯЛАР КӘРӘК...

## "Урал батыр"ға, "Төньяҡ амурҙары"на арнап

(Башы 1-се биттә).

Мәҫәлән, халҡыбыҙҙың исемдәрен мәңгеләштерергә мөмкин булған тарихи шәхестәре, айырым даталар һәм башҡа ваҡиғалар бик күп. Әммә бер "ләкин" бар - баҙнатһыҙлыҡмы ул, әллә йомшаҡлыҡмы, әллә эҙмә-эҙлелектең юҡлығымы, ләкин күп осраҡта тамаҡ ярып ҡысҡырып, дау алып һүҙ башлайбыҙ ҙа, эште аҙағынаса алып барып еткермәйбеҙ. Әйтәйек, "Урал батыр" эпосына бағышланған аллея булдырыу тураһында ҡасандыр һүҙ алып барҙыҡ та, шунан ары китмәнек. Шулай уҡ былтыр, мәлдән файҙаланып, 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан башҡорт полктарына бағышлап "Төньяҡ амурҙары" аллеяһын ойоштороу идеяһы күтәрелде лә, тағы онотолдо. Эйе, мәшәҡәтле һәм сығымлы проекттар буласаҡ улар, әммә туризмды үҫтерәбеҙ тип хыялланабыҙ икән, иҫәп нөктәһенән Өфөнән башланыуы насармы ни? Аҙ ғына хыялды эшкә егеп, мәҫәлән, шул уҡ Шүлгәнташ мәмерйәһенә туристик маршруты баш ҡалағы "Урал батыр" аллеяһынан башлау хилафмы? Матур тәбиғәт ҡосағында ҡунаҡтарҙы эпостың персонаждары ҡаршы алһа, күлендә аҡҡоштар йөҙһә, өс - башҡорт, рус, инглиз телдәрендә эпостан өҙөктәр яҙылған стелалар ҡаршы алһа, артабан, бәлки, Башҡорт академия драма театрында "Урал батыр" спектаклен тамаша ҡылып, шунан ғына Шүлгәнташ мәмерйәһенә юл тотҡанда, доньяның теләһә ҡайһы төбәгенән килгән туристар ҙа мәмерйәне тәбиғи һәйкәл, тәбиғи ҡомартҡы итеп кенә түгел, башҡорттар кеүек үк, Кешелектең сығанағы тип ҡабул итер ине.

Йә булмаһа, "Төньяҡ амурҙары" аллеяһында башҡорт полктарының ҡаһарманлығын һүрәтләүсе асыҡ күк аҫтындағы музей йәиһә диорама эшләп, шулай уҡ туристарҙы Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрына "Төньяҡ амурҙары" балетына (әйткәндәй, "Урал батыр" һәм "Төньяҡ амурҙары" балеттары ҡасандыр ошо театрҙа ла ҡуйыла. Тимәк, уны тергеҙеү ихтыяжы бар һәм был бик ҡәрәк та. Бер яҡтан, туристар милли мәҙәниәт менән дә яҡыныраҡ танышa, икенсе яҡтан, театрҙың милли "йөҙө" барлыҡҡа килә) алып барыу - маршруттың төп өлөшөн тәшкил итер ине.

Әйткәндәй, ҡала округы хакимиәте был проблеманы күҙ уңында тотоп, йылына 3-4 ял итеү зонаһы эшләүҙе йәки тергеҙеүҙе маҡсат итеп ҡуя. Быйыл, мәҫәлән, Пушкин урамы буйындағы аллея (Ленин урамынан К. Маркс урамына тиклем), Беренсе Май урамының төньяҡ өлөшө (С. Орджоникидзе исемендәге мәҙәниәт һарайынан Беренсе Май урамына тиклем), Театр скверы "икенсе һулыш"ын аласаҡ. Иң мөһиме - Салауат Юлаев баҡсаһы тулыһынса реконструкцияланасаҡ. Уны ла киләсәктә асыласаҡ Салауат эҙҙәре буйлап туристик маршруттың башы тип ҡуҙаллаһаҡ... Әлбиттә, кемдер был яҙмаларҙы утопия тип, тиҙерәк ситкә алып ҡуйырға тырышыр. Әммә мәғлүм булыуынса, һәр нәмә лә был тормошта ике тапҡыр барлыҡҡа килә: тәүҙә - хыялда, икенсеһендә -ысынбарлыҡта...

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!



# ЙӘШЕЛ ҠАЛА

**Бөгөн республикабыҙ баш ҡалаһы өсөн йәшелләндереү һәм ландшафт проектын эшләү көнүҙәк урындарҙың береһен биләй.**

Йәшелләндереү - ҡаланы төҙөкләндереү буйынса иң өҫтөнлөклө йүнәлештәрҙең береһе, ә ландшафт дизайны - ул "ҡаланың кейеме", уның имиджы һәм тышҡы йөҙө. Был йәһәттән ҡаланың йәшел ҡалҡаны йылдан-йыл тулылана: яңы скверҙар барлыҡҡа килә, урамдар гөл-сәскәгә күмелә. Ҡаланы йәшелләндереүҙең заманса йүнәлештәре Өфөнө Европа стандарттарына яҡынлаштыра, шуға ҡарамаҫтан, "Ҡаланы йәшелләндереү хужалығы" МУП хеҙмәткәрҙәре уның үҙ "йөҙөн" һаҡлап ҡалырға тырыша. Предприятиеның эшмәкәрлеге ҡаланың тышҡы эстетик йөҙөн, уның экологик торошон яҡшыртыуға, баш ҡалала уңайлы һәм төҙөк мөхит булдырыуға һәм уны һаҡлауға йүнәлтелгән. Былтыр, мәҫәлән, Өфөлә 49 мең ағас һәм ҡыуаҡ үҫентеһе, шул иҫәптән 800 ҙур ағас ултыртылған. Быйыл иҙ һуңында ла эштәр ҡабат гөрләйәсәк. Былтыр көҙгөһөн предприятие ҡарамағында булған объекттарҙа барлығы 560 мең ләлә ултыртылған. Улар яҙғыһын тәүгеләрҙән булып сәскә атып, күҙ яуын алып ултырасаҡ. Шулай уҡ ҡала урамдары буйлап тимер-бетон вазондар, күп ҡатлы сәскә конструкциялары урынлаштырыласаҡ, сәскәләр үҫкән кашполар эленәсәк. Текә битләүҙәр төргәкле газон ярҙамында йәшелләндереләсәк.

**Өфө ҡала округы хакимиәте сайтынан.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓"Беҙҙең киләсәк" төбәк социаль программалары фонды социаль эшҡыуарлыкты үҫтереүгә өлөш индергән өсөн премияға дәғүә итеүселәрҙән ғаризалар ҡабул итә башланы. Премияның генераль бағыусыһы булып - Стратегик инициативалар агентлығы, ойошторроусылар булып Рәсәйҙең Иҡтисади үҫеш министрлығы һәм Йәмәғәт палатаһы сығыш яһай. 2013 йылда премия ете номинацияла тапшырыла. Тулыраҡ мәғлүмәт "Беҙҙең киләсәк" фондының сайтында урынлаштырылған. Премияға дәғүә итеүселәрҙән ғаризалар 2013 йылдың 29 мартына тиклем ҡабул ителә. Лауреаттарҙы наградлау тантанаһы ағымдағы йылдың 16 майында үтә.

✓"Медиалогия" компанияһы билдәләүенсә, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Волга буйы федераль округы субъекттары баш ҡалалары башлыҡтарының медиа-рейтингында Түбәнге Новгород башлығы Олег Кондрашовтан һәм Саранск ҡалаһы башлығы Петр Тултаевтан ҡала өсөнсө урында килә.

✓Өфөлә "Әсә һәм бала" перинаталь үҙәгенә нигеҙ ташы һалыу тантанаһы үтте. Сарала Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов та ҡатнашты. Яңы учреждение Октябрь районында, 21-се ҡала клиник дауаханаһы янында төҙөләсәк һәм уны 2015 йылға тамамлау планлаштырыла. Бында 1200 эш урыны булдырыласаҡ. "Әсә һәм бала" селтәренең бындай үҙәктәре әлеге ваҡытта Рәсәйҙең ике ҡалаһында ғына бар. Киләсәктә уларҙы Екатеринбург һәм Түбәнге Новгород ҡалаларында асыу планлаштырыла.

✓Өфө урман хужалығы техникумы командаһы Өфөлә Рәсәйҙең урмансылыҡ уҡыу йорттары араһында үткән V Ҡышҡы спартакиадала иң яҡшыһы тип танылды. Сарала 17 урман хужалығы техникумынан 70 спортсы ҡатнашты. Улар ике көн дауамында саңғыла, саңғы спринтында һәм саңғы эстафетаһында ярышты.

✓Өфөлә белем биреү хеҙмәттәрен күрһәтеүгә дәүләт лицензияһы булған нигеҙ шәхси балалар баҡсаһы эшләй. 57 эшҡыуар бала ҡарау, тәрбиәләү һәм үҫтереү буйынса хеҙмәттәр күрһәтә. Муниципалитеттар уларға һәр яҡлап ярҙам күрһәтә. 2012 йылда дәүләткә ҡарамаған мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларына 2,1 миллион һумдан ашыу суммаға субсидия түләнгән.

"АЙЫҠ АУЫЛ" КОНКУРСЫ

**Бөгөн кешелә патриотлыҡ тойғоһо ҡалманы, тиһәләр ҙә, ил ағалары булһынмы, зыялылар булһынмы, олигархтар булһынмы - барыһы ла Тыуған илен, уның халҡын һаҡлап ҡалыу тураһында баш вата. Һәр кем был юлды үҙенсә күрә, һәр кем үҙенең ҡарашын белдерә, әммә күптәренең идеяһы бары тик йәмғәтселек алдында матур, пафослы һүҙҙәр һөйләп, үҙ мәнфәғәтен хәстәрләүгә, сәйәси мәрәй йыйыуға ғына ҡайтып ҡала.**

# БЕҘ ВАТАНДЫ ҺАҠЛАЙБЫҘ,

## ә айыҡлыҡ - ҡоралыбыҙ

Ә ил киңлегендә йәшәгән барлыҡ милләттәрҙе бергә туплаrҙай, Рәсәйгә ситтән дошман янағанда бер йоҙроҡ булып туплаnып, илен яҡларға баҫтырырҙай берҙәм милли идея юҡ. Хәйер, бар ундай милли идея, әммә уны Рәсәй халҡы, унан бигерәк етәкселеге ҡабул итергә әҙер түгел. Бына, мәҫәлән, Айыҡлыҡ өсөн көрәш берлеге рәйесе Владимир Жданов һәм уның арҡаҙаштары бына 30 йыл инде халыҡ аңына айыҡлыҡ идеяһын һеңдерергә тырыша, әммә Эскелеккә һәм алкоголизмға ҡаршы көрәш яҡлы команда уларға һәр ваҡыт аяҡ сала. Ошо урында зирәк уҡыусы шундай һорау бирер: айыҡлыҡ өсөн көрәш менән эскелеккә һәм алкоголизмға ҡаршы көрәш араһында ниндәй айырма бар? Эйе, тәү ҡарашҡа, икеһе лә бер маҡсатты алға ҡуйған кеүек, әммә ентекләп уйлап ҡараһаң, улар араһында айырма бик ҙур. Ябай ғына итеп әйткәндә, эскелеккә һәм алкоголизмға ҡаршы көрәшеүселәр 70 йыл инде көрәш алып бара, ошо маҡсатта төрлө дәүләт, махсус программалар тормошҡа ашырыла, был эш менән наркологтар шөғөлләнә, миллиардтарса һум аҡса түгелә, ләкин һөҙөмтә юҡ. Ни өсөн? Яуап ябай: сөнки был команда, ғәмәлдә, мәҙәни эсеүҙе пропагандалай, йәғни, мәҙәни эсеү бер ниндәй ҙә зыян килтермәй. Ә Айыҡлыҡ өсөн көрәшеүселәр тап ошо мәҙәни эсеүгә ҡаршы сығып, ысын мәғәнәһендә айыҡ тормош рәүешен милли идея итеп күтәрергә саҡыра. Тәүге командаға энтузиазм ярҙамында ҡаршы тороп, улар йәш быуынды сабый саҡтан уҡ айыҡ тормош алып барырға әҙерләй. Ә Эскелеккә һәм алкоголизмға ҡаршы көрәшеүселәр иһә, киреһенсә, балаларҙы мәҙәни эсеүгә өйрәтә: телевизорҙан көнө-төнө күрһәтелгән кинофильмдар, сериалдарҙа уныштты, бай, матур тормош алып барыусыларҙың, ғәҙәттә, ҡулдарында затлы сигара һәм мотлаҡ шарап һалынған бокал йәки араҡы ҡойолған рюмка була. Улар күҙлегенән мәҙәни эсеү шулай булырға тейеш. Ә балалар беҙҙең әйткәнде түгел, нимә күрә, шуны ҡабатлай.

"Рәсәйҙә бөгөн ысын мәғәнәһендә һуғыш бара. Ике Ватан һуғышында ёнеү яулаған илде хәҙер алкоголь, тәмәке, наркотиктар ярҙамында еңел генә юҡҡа сығарырға итәләр. Статистикаға күҙ һалһаҡ, Рәсәйҙә йылына алкоголь эсеп - 800 меңдән ашыу, тәмәкенән - 400 мең, башҡа наркотиктарҙан 100 мең самаһы кеше үлә. Быға шулай уҡ алкоголь һәм наркотиктар ҡулланыу һөҙөмтәһендә ҡылынған енәйәттәр, юл-транспорт фажиғәләре ҡорбандарын да ҡушһаҡ, Чечня һуғышында ҡорбан булғандарҙан да күберәк һандар килеп сыға. Бөгөнгө һуғышта ҡаһармандар ҙа, батырҙар ҙа юҡ. Ә аҡылын эсеп бөтөргән өйөр менән идара итеүе еңел, уларға бер нәмә лә кәрәкмәй. Бер нәмә лә кәрәкмәгән кешенән уның ерен, илен тартып алыуы ла бер ни тормай.

Минән бер ваҡыт киң мәғлүмәт сараһында эшләүсе берәү, ни өсөн һеҙ айыҡлыҡ өсөн көрәшәһегеҙ, ул һеҙҙең өсөн нимә, шөғөлмө, эшме, тип һораны. Айыҡлыҡ - ул ҡорал. Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ: 1942 йыл икән, ти. Мин яралы 5 һалдатым менән окопта дошмандың тағы бер һөжүмен кире ҡағырға әҙерләнәм. Беҙ Ватаныбыҙҙы һаҡлайбыҙ. Шуның кеүек, мин бөгөн тотош илдә айыҡлыҡ өсөн көрәшеүселәрҙе бергә туплап, Ватаныбыҙҙы алкоголь, тәмәке тип аталған наркотиктар менән һөжүм итеүселәрҙән һаҡларға тырышабыҙ. Сөнки бөгөн Ер шарының 2/3 өлөш халҡы "коро закон" буйынса йәшәй, ә ҡалған бер өлөшө һаман айыҡтан етә алмай. Ошо бер өлөштөң күпселеген Рәсәй халҡы тәшкил итә лә инде", - ти Владимир Георгиевич Жданов.

Әйткәндәй, ғалимдың, билдәле собриологтың сираттағы семинары һәм күҙҙәрҙең күреүен яҡшыртыу буйынса практик сараһы ла тап республикала сираттағы "Айыҡ ауыл" конкурсы рәсми рәүештә старт алған көндә ойошторолдо. "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт ойошмаһы һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты тарафынан башланғыс алған һәм күптәрҙең күңеленә хуш килгән был сара, уйлап ҡараһаң, хәҙер инде республика Хөкүмәте "ҡанаты" аҫтына инеп, эшмәкәрлеген киң йәйелдерергә тейеш кеүек ине. Әммә уны рәсми рәүештә республика конкурсы кимәленә күтәреү тураһындағы положение һаман да тәғәйен ҡултамға һалынғаның инде дүрт айҙан ашыу котә. Күрәһең, күҙҙәребеҙ асылып етһен йәки тормошҡа күҙлектәребеҙҙең алһыу быялаһы аша ҡарауҙан туктау өсөн дүрт ай ғына түгел, 70 йыл да һабаҡ бирмәгән әле...

**Зәйтүнә ХӘБИРОВА.**

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# ӨЛӨШСӨ БУЛЫР АЛДЫНАН...

## кәңәшләш!

**Республикала алданған өлөшсөләр проблемаһын тамырынан юҡҡа сығарыуға алынған йүнәлештә дауам итеп, ҡала округы хакимиәтенең халыҡты социаль яҡлау буйынса идаралығының ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау бүлеге тарафынан бихисап эштәр башҡарыла. Уларҙың маҡсаты - ҡулланыусыларҙың торлаҡ төҙөлөшөндә өлөшсө булып ҡатнашыуында осраған хоҡуҡ боҙоуҙарҙы булдырмау һәм был категория граждандарҙы яҡлау.**

Әлеге ваҡытта ошо йүнәлештә төрлө саралар уҙғарыла, күсмә консультациялар биреү ойошторола, мәғлүмәт белешмәләре, ҡулланыусыларға төрлө кәңәштәр бирелгән әсбаптар нәшер ителә. Бөтә донъя ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау көнөндә - 15 мартта - рәсми рәүештә "Ҡулланыусыға - буласаҡ төҙөлөш өлөшсөһөнә ярҙамға" тип аталған белешмә таратыла башлаясаҡ. Киләсәктә был брошюра ирекле һатыуға сығарыласаҡ. Был ҡулланманың әһәмиәте шунда: унда ҡануниәттең төп мәлдәренә һылтанмалар, нисек итеп килешеү төҙөү, ниндәй мәлдәргә иғтибар биреү зарурлығы ентекле аңлатылған.

Шулай уҡ журналистар менән осрашыуҙа бүлек етәксеһе Зифа Фазлыәхмәтова һыҙыҡ өҫтөнә алыуынса, төҙөлөштә өлөшсө булып ҡатнашырға теләүсе граждан түбәндәге төп ҡағиҙәләрҙе иҫендә тоторға тейеш. Тәү ситатта, төҙөүсе компания тураһында тулы мәғлүмәт алырға һәм уны анализларға кәрәк (төҙөлөш баҙарында нисә йыл эшләй, ошо ваҡыт эсендә күпме объект төҙөлгән һәм улар ниндәй баһа алған). Шулай уҡ төҙөлөш алып барыуға рөхсәте, төҙөлөш алып барыласаҡ ергә милек хоҡуғы йәки аренда хоҡуғы бармы-юҡмы икәнлеген асыҡлау ҙа мөһим. Төҙөүсенең проект декларацияһының ҡайҙа баҫылып сығыуы менән ҡыҙыҡһыныу ҙа зарар итмәйәсәк, сөнки тап ошо документта уның тураһында барлыҡ мәғлүмәт бирелә лә инде. Әгәр ошо документтар булмаһа, төҙөлөш алып барыусыға аҡса күсергәндә граждандар саҡ ҡына булһа ла уйланырға тейеш. Бынан тыш, төҙөүсе компания граждандарға ойошторoу документтары, дәүләт теркәүе тураһында, һалым органында иҫәпкә тороуы тураһында таныҡлыҡ, финанс-хужалыҡ эшмәкәрлеге тураһында отчет, раҫланған йыллыҡ отчеттар, бухгалтер балансы, аудитор һығымталарын һис тотҡарлыҡһыҙ танышыу өсөн күрһәтергә бурыслы. Әгәр барлыҡ документтар тәртиптә икән, өлөшсөлөк тураһында килешеү төҙәргә лә мөмкин. Әммә бында ла дүрт мотлаҡ пункт булыуын онторға ярамай. Беренсенән, унда проект документтарына ярашлы аныҡ объекттың тапшырылыуы тураһында билдәләмә булырға тейеш. Икенсенән, унда объекттың төҙөлөп бөтөп тапшырылыу ваҡыты күрһәтелеүе мотлаҡ. Өсөнсөнән, өлөшсө түләйәсәк сумма, уны түләү ваҡыты һәм тәртибе аныҡ билдәләнергә тейеш. Дүртенсенән, төҙөлөш объектына гарантия ваҡытының билдәләнеүе зарур. Әгәр ошо шарттарҙың береһе генә булмағанда ла, аҙым яһар алдынан тағы бер тапҡыр уйлау ҡамасауламаҫ. Хәйер, үҙ аллы эш итеүгә ҡарағанда, барлыҡ документтар пакетын туплағандан һуң, консультацияға ҡала хакимиәте халыҡты социаль яҡлау буйынса идаралығының ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау бүлеге белгестәренә консультация һорап мөрәжәғәт итеү урынлыраҡ буласаҡ. Улар Октябрь проспекты, 114/1 йортонда 4-се бүлмәлә дүшәмбе иртәнге сәғәт 10-дан 13 сәғәткә тиклем, кесе йома сәғәт 14-тән 18-гә тиклем ҡабул итә.

**Земфира ЙӘНТҮРИНА.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Бауырың ауыртһа

❖ 1 ҡалаҡ әрем һәм гөлйемеште 1 литр ҡайнаған һыуға һалып, төнгөлөккә термоста ҡалдырырға. Ашар алдынан ошо төнәтмәне 100 грамлап, көнөнә өс мәртәбә эсергә. Тирегеҙ ҙә матурланып китәсәк.

❖ Кишер һәм уның һутынан өҙөлмәгеҙ - улар бөйөрҙәге һәм бауырҙағы ҡомдо сығара, таҙалай.

### Һыу етешмәһә...

Организмға һыу етешмәһә, ауыҙ кибә, баш ауырта башлай, һәр нәмәгә иғтибар кәмей, ҡан баҫымы төшөүе ихтимал, тире кибә һәм һығылмалығын юғалта, һейҙек ҡараһыу төҫкә инә. Шуға күрә бүлмә температураһындағы һыуҙы көн дә рәхәтләнеп эсегеҙ.

❖ Иртә менән 1 стакан һыу эсһәң, ҡаталау ҙа бөтә.

### Баш ауыртыуы

Сөгөлдөр һутына мамыҡты еүешләп, ҡолағыңа ҡуй.

### Ябығам, тиһәң...

Яй ғына аша, ҡабаланма. Ашығып ашағанда инсулин күп бүленеп сыға һәм кешенең йыш ашағыһы килә. Йыш ашау һимертә.

### Йөрәк ауыртҡанда

2 ҡалаҡ киптерелгән мелисса үләнен 1,5 стакан ҡайнаған һыуҙа төнәтергә һәм көнөнә 3 мәртәбә яртышар стакан эсергә.

### Боғаҡ (зоб)

200-әр грамм бал, әстерхан сәтләүеге, ҡоро ҡарабойҙай ярмаһы алына. Сәтләүек менән ҡарабойҙай ҡәһүә тартҡыстан үткәрелә һәм бал менән болғатыла. Беренсе порцияны 1 көн эсендә ашап бөтөргә. Өс көндән һуң тағы бер порция әҙерләйһең, уны инде 9 көн буйы ашайһың. Өс көн ял иткәс, ҡатнашманы тағын яһайһың һәм шулай уҡ 9 көн ашайһың.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✔ *Ул иң тәүге сиратта милли белгестәр әҙерләү буйынса күп эшләй. Ғәзиз Әлмөхәмәтов Өфөгә районлдарҙан һәләтле балаларҙы саҡырып килтергән, үҙендә йәшәткән, имтиханға барыу өсөн матур кейемдәр алып биргән.*



УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА



# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ

### Егерме һигеҙенсе дәрес: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

Ислам сәнғәте. Өйөгөҙҙә боронғо баласҭар йәки кейем, биҙәлгән ағас һауыттар, боронғо һандыҡ бармы? Ислам дине орнаменты менән башҡорттарҙың милли орнаменты ни яғы менән айырыла? Башҡорт орнаменты һәм ислам дине орнаменты өлгөләре менән таныштырыу яҡшы булыр. Дин һәм милли сәнғәт бер-береһен байыта. Ислам дине һүрәттәр, кеше һүрәттәре төшөрөүҙе тыйһа ла, каллиграфия, орнамент бик ныҡ алға киткән. Уҡыусыларға матур яҙыуҙың - каллиграфияның сәнғәт төрө булыуын аңлатырға кәрәк. Ҡөрьәнде биҙәү, уны Алла һүҙе тип ҡәҙерләү тураһында тағы иҫтәренә төшөрөп, ғөмүмән, китаптың бик ҙур байлыҡ икәнен уҡыусының зиһененә һеңдерергә кәрәк. Әлбиттә, хәҙер интернет аша байтаҡ мәғлүмәттәргә эйә була алабыҙ. Әммә китап аша алынған белем күпкә отошлораҡ. Уҡыусыға китап менән компьютерҙың айырмаһын аңлатып китеү отошло булыр.

### Егерме һигеҙенсе дәрес: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

Бөгөнгө көндә тулы булмаған ғаиләләр ишәйә бара. Шуның өсөн ҡайһы бер уҡыусыла, атай-әсәйҙәренең яңылыш аҙымы йәки уңышһыҙлығы арҡаһында кәмһенеү тойғоһо барлыҡҡа килмәһен өсөн, уҡыусының үҙенән яҙма эш башҡартыу яҡшы булыр. Һин ниндәй ғаиләлә йәшәргә теләр инең, тигән темаға үҙ фекерен яҙһын бала. Уның эске кисерештәрен белеп, артабанғы аҙымышында, бәлки, үҙгәрештәр индерергә, ярҙам итергә кәрәклеге лә асыҡланыр. Ни теләһәгеҙ - шуны яҙығыҙ, минән башҡа бер кем дә уҡымаясаҡ, тип иҫкәртеп ҡуйырға һәм, әлбиттә, артабан баланың сере менән үҙен сыбыртҡыламаҫҡа кәрәк. Был эш фәҡәт ярҙам итеү йөҙөнән генә башҡарылһын.

**Хәҙис шәриф.**

*Арҡтан һайын халҡым - өммәтем,*
*Өммәтемдең дәрте - һиммәте,*
*Арта барыр минең ғорурлығым,*
*Меьминдәрҙең ҡәҙер-киммәте.*

* * *

*Нәсел-шәжәрәне ономағыҙ,*
*Ҡәрҙәштәргә йышыраҡ барығыҙ.*
*Хәлен белеп, күҙенә ҡарағыҙ.*
*Йөрөшкәндә, туған алыҫ түгел,*
*Алыҫ булғанда ла арағыҙ.*
*Йөрөшмәгән туған яҡын түгел,*
*Яҡын булғанда ла арағыҙ.*

### Егерме һигеҙенсе дәрес: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

Ғаилә байрамдары. Уҡыусыға ғаилә тулымы, тулы түгелме - барыбер ғаилә тип атала, тип аңлатырға кәрәк. Ғаилә байрамдарына ниндәй байрамдар инеүен яҙып ҡуйһындар. Яңы йыл - ул ғаилә байрамы. Тыуған көндәр, сабый бала тыуыуы, ҡунаҡ килеү, берәй яҡын туғаның килеүе, алыҫта йәшәгән дуҫтарыңдың килеүе... Былар - байрам. Һәр уҡыусы ғаилә байрамдарын нисек үткәреүҙәре тураһында бәләкәй инша яҙһын.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ЙӘШТӘР ҠОРО

# МОҢ ТЫНМАҺА...

## ғаләм мәңге йәшәр

**Баш ҡалала урынлашҡан гимназия-интернаттар араһында музыка йүнәлешендә белем биреүсе уҡыу йорто ла бар. Бөгөнгө "Йәштәр ҡоро" рубрикаһында Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернаты уҡыусылары Гөлйемеш Баязитова, Хәйҙәр Хәмиҙуллин, Айзилә Мусина, Заһиҙә Шакирова, Заһит Сөләймәновтар менән үҙ тарихында өс меңдән ашыу белгес әҙерләп сығарыусы гимназия, унда уҡыуҙың үҙенсәлектәре тураһында һөйләшәбеҙ.**



**▸ Республика гимназия-интернаты күптән түгел үҙенең етмеш йыллыҡ күркәм юбилейын билдәләне. Тимәк, һеҙ бик боронғо уҡыу йорттарының береһендә белем алаһығыҙ. Гимназияның тарихына әйләнеп ҡайтҡанда, гәзит уҡыусыларға уның тураһында ҡыҫҡа ғына итеп нимә әйтергә булыр ине?**

**Айзилә:** Гимназиябыҙ бынан күп йылдар элек, бөйөк Ватан һуғышы мәлендә - 1943 йылда асылған. Башта унда ата-әсәһе һуғышта һәләк булған 17 етем малай уҡый. 1950 йылдарҙа ҡыҙҙарҙы ла ҡабул итә башлайҙар. Башта тынлы инструменттарҙа ғына уйнарға өйрәтәләр, сөнки уҡыу йорто хәрби музыканттар әҙерләргә тейеш була.

**Заһиҙә:** Гимназия башҡорт халҡының бөйөк улдарының береһе Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемен йөрөтә. Йырсы, музыкант булараҡ, былдай уҡыу йорто тураһында ғүмере буйына хыялланһа ла, ул асылған саҡта Ғәзиз Сәлих улы был донъяла булмай инде. Быйтыр Айзилә менән икәүләп уның ҡыҙының йортона барып, композиторҙың тормошон, архивын өйрәндек. Бына шунда уның ниндәй бөйөк шәхес булыуын, милләте өсөн күп әһәмиәтле эштәр башҡарыуын аңланыҡ та инде. Ул республикала музыкаль белемле кадрҙар, иң тәүге сиратта милли белгестәр әҙерләү буйынса күп эшләй. Ғәзиз Әлмөхәмәтов Өфөгә районлдарҙан һәләтле балаларҙы саҡырып килтергән, үҙендә йәшәткән, имтиханға барыу өсөн матур кейемдәр алып биргән. "Өйөбөҙ гел дә тулы була торғайны", тип хәтерләй ҡыҙы. 1932 йылда Мәскәү консерваторияһы эргәһендә Башҡорт опера студияһы ла уның тырышлығы менән асыла. Был студияға уҡыусыларҙы халыҡ араһынан йөрөп, үҙе йыя, тап ошо студияның беренсе сығарылышы уҡып ҡайтҡас, Башҡорт опера театры асыла. Башҡорт филармонияһын асыуҙа ла Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың өлөшө ҙур. Беренсе профессиональ композитор, БАССР-ҙың халыҡ артисы исеменә лайыҡ булған йырсылар араһында тап уның иң беренсе булыуын да онотмайыҡ.

**Гөлйемеш:** Бөгөн дә гимназия урта белемдән тыш, өҫтәмә музыкаль белем бирә. Тынлы һәм һуҡма ҡоралдар, фортепиано, музыкаль-теоретик, хор менән дирижерлыҡ итеү һәм йыр, тынлы һәм һыҙма ҡоралдар, халыҡ музыка ҡоралдары, башҡорт музыка ҡоралдары йүнәлештәре буйынса уҡыйбыҙ.

**Заһит:** Юбилей саралары һәр уҡыусы өсөн оло бер ваҡиға булғандыр. Башҡортостандың бөгөнгө мәҙәниәтен бар иткән, уны үҫтергән кешеләрҙең ҡасандыр әле беҙ уҡып йөрөгән гимназияла белем алыуын белеү, уларҙың бер урынға йыйылыуы мине тетрәндерҙе лә, дәртләндәреп тә ебәрҙе. Был сара өсөн директорыбыҙ Эльмира Рафаил ҡыҙы Сафинаға, бөтөн уҡытыусыларыбыҙға рәхмәтлебеҙ.

**Хәйҙәр:** Беҙгә лә милли кадр тип ышанып ҡарағандарын аңлайбыҙ, яуаплылыҡ тоябыҙ. Гимназия асылған көнөнән үк һәр яҡлап көслө уҡыу йорто иҫәпләнгән, беҙ ошо кимәлде тотоп ҡалырға тырышып уҡыйбыҙ.

**▸ Ғәзиз Әлмөхәмәтов бик оҫта йырсы ла булған, уның "Мин йырларға халҡымдан өйрәндем", тигән ҡанатлы һүҙҙәре гимназиябыҙҙың стеналарына алтын хәрефтәр менән уйып яҙылған. Республиканың төрлө төбәктәренән йыйылған һәләтле балалар уҡыған уҡыу йорто уның ошо һүҙҙәренә тоғролоҡ һаҡлаймы? Башҡорт халыҡ йырҙарын йырларға өйрәтеү йүнәлешендә ниндәй эш алып барыла?**

**Заһиҙә:** Арабыҙҙа халыҡ йырын йырлаусылар күп. Мин үҙем оҙон йырҙарҙы бәләкәйҙән йырлайым, сөнки атайым халыҡ йырҙарын оҫта башҡарыусы. Тәүге уҡытыусым да атайым, ул мине төрлө конкурстарға ла әҙерләне. Шул рәүешле мин абруйлы бәйгеләрҙең береһе - "Ирәндек моңдары"нда ла бәләкәй саҡта уҡ ҡатнаштым. Гимназияла йырларға Фәнүнә Сиражетдинова өйрәтә. Киләсәктә йырсы булырға хыялланам. Йыр яҙып та ҡарағаным бар. Ябай ғына ул, музыкаль белеме булмаған тамашасы ла аңларлыҡ ҡына.

**Айзилә:** Бында ысынлап та, йырсы булам, тигән хыялдарын тормошҡа ашырырға теләүселәр ҙә килә уҡырға. Шуға ла 5-6-сы кластарҙа һәр уҡыусы тиерлек Фәнүнә Хәниф ҡыҙы алып барған түңәрәккә яҙыла. Халыҡ йырын, бәлки, өйрәнәм, тип кенә өйрәнеп булмайҙыр, шулай ҙа тырышһаң, айыуҙы ла бейергә өйрәтеп була, тиҙәр бит. Арабыҙҙа тәбиғи һәләттәре асылып киткәндәр байтаҡ. Шуға беҙ бөгөн Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың юлын лайыҡлы дауам итәбеҙ, тип, тулы ышаныс менән әйтә алабыҙ.

**Хәйҙәр:** Гимназияла йырсылар күп шул, хорға ла йөрөйҙәр. Тик күп түңәрәктәргә йөрөп өлгөрөп булмай, ваҡыт етмәй.

**Заһиҙә:** Тап ошо гимназияла ваҡыттың ни тиклем ҡәҙерле икәнен аңланым. Көн дауамында бер минут та буш мәлебеҙ юҡ. Ғөмүмән, интернатта йәшәү, гел генә нимә менәндер шөғөлләнеү баланы балалыҡ осоронан тиҙ сығара. Был, бер яҡтан, насар, баланың бала сағы булырға тейеш, тип иҫәпләйем. Икенсе яҡтан, бәләкәйҙән үҙең өсөн, ҡылған ҡылыҡтарың өсөн яуап бирергә өйрәнеү һине киләсәк тормошҡа яҡшыраҡ әҙерләй, үҙ аллылыҡ тәрбиәләй.

**Заһит:** Көнө буйы дәрестән дәрескә, түңәрәктән түңәрәккә йүгерәһең, шулай ҙа үҙең менән ҡәнәғәт булмаған саҡтар күп була. Кисен йоҡларға ятаһың да, их, бына шул нәмәгә өлгөрөп булманы, тип уйланаһың. Дүрт оркестр эшләй, үҙен ихтирам иткән һәр уҡыусы уларҙың һәр береһендә уйнап, юғары кластарҙа өлкән оркестрҙа уйнау бәхетенә өлгәшергә тейеш. Сөнки был оркестр Башҡортостанда ғына түгел, хатта Рәсәйҙә билдәле. Ҡайҙа барһаҡ та танылйҙар, конкурстарҙа урын яулап торабыҙ, етәксебеҙ - Фәнзил Фәйзрахман улы Ниғмәтйәнов. Мин оркестрҙа тромбонда уйнайым, унан һуң ҡурай, бейеү, драма түңәрәктәрендә шөғөлләнәм.

**▸ Бөйөк педагог Сухомлинский "Музыкаль белемһеҙ аҡыл үҫеше тулы була алмай", тигән. Һеҙҙең өсөн музыка нимә - шөғөлмө, ваҡытлы мауығыумы, әллә үҙенде камиллаштырыу сыулымы? Киләсәктә һайлаясаҡ һөнәрегеҙ музыка менән бәйле буласаҡмы?**

**Заһиҙә:** Музыка кешене үҫтерә. Баш мейеһе генә түгел, эске донъяң үҫешә, һәләттәрең төрлө яҡлап асыла. Музыкаль белеме булғандарға йәшәүе лә еңелерәктер, тип уйлайым, сөнки музыка - ул үҙе бер тормош. Музыканы аңлаған кеше ябай кешегә ҡарағанда тормошто ныҡыраҡ һәм тәрәнерәк аңлай. Музыканттарға рәхәт, уларға аҡыллы булыу кәрәкмәй, тигәнгә ышанмағыҙ, мәсәлән, гармония фәне алгебраға ҡарағанда ла ауырыраҡ. Унда баш эшләүе ныҡ кәрәк. Унан тыш, беҙ бит башҡа уҡыусылар кеүек, дөйөм мәктәп программаһын да үҙләштерәбеҙ, математиканы ла, химияны, физиканы ла уҡыйбыҙ, Берҙәм дәүләт имтиханы ла тапшырабыҙ. Киләсәктә һөнәрем музыка менән бәйле булмаһа ла, мин унан ғүмергә айырыласағым юҡ.

(Дауамы 9-сы биттә).

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ШӘРЕҠТӘН - ҒӘРЕБКӘСӘ,

## йәғни Урал аша үткән ырыуҙар юлы



### Кәтерин юлы

Кәтерин (Екатерина, Әбей батша) юлы беҙҙең төбәк аша үткән юлдар сатыршаһында йөшерәктер. Уның барлыҡҡа килеүе беҙҙең көнсығыш табындарының Рәсәй империяһы тарафынан тулыһынса буйһондоролоп, Урта һәм Көньяҡ Уралда, Башҡортостандың көнсығыш, көньяҡ һәм Минзәлә һыҙмаһы буйлап ҡалғаләр төҙөләп, уларҙың ныҡлы хәрби терәккә әйләнеүе осоронан башлана. Уҡыусы мағул һүҙе "даруға" менән шул уҡ һүҙҙе урыҫлаштырып алған, хәҙер урыҫ һүҙе тип аталған "дорога" - юл һүҙен айыра белергә тейеш.

Даруға мағул һүҙе. Даруға - дөйөм бер ҡитға өлөшөндәге йүнәлеш, шул йүнәлештәге ерҙәрҙе аңлата. Даруғалар беҙҙең Башҡортостанда дүртәү булған. Көньяҡҡа - Нуғай юлы, төньяҡҡа - Оса юлы, көнбайышҡа - Ҡаҙан юлы һәм көнсығышҡа - Себер юлы йәки Себер даруғаһы. Был бүленеш Башҡортостанда кантондар системаһы керетелгәнсе, 1798 йылға тиклем һаҡлана. Ә ул даруғалар Алтын Урҙа дәүләте осоронан мираҫ булып ҡалған.

Урыҫ империяһы боронғо башҡорт ҡалаһы Өпәгә (Өфә) килеп ултырып, тамыр йәйгәс, 1586 йылдан 1592 йылға тиклем Башҡортостан хәритәһен өйрәнеп, сәйәсәттәренә ярашлы Урҙа бүленешен ысынбарлыҡта аяҡҡа баҫтыра. 1637 йылда Ибергә күсерелгән крепостной крәҫтиәндәрен, Ибер төмәнләләрен, беҙҙең Табын, Ҡатай, Көҙәй, Һалйот, Терһәк, Өпәй, Ҡыуаҡан кеүек көнсығыш ырыуҙарын Себер приказына ҡағыҙҙа индерһәләр ҙә, ысынбарлыҡта тулы буйһондороуға өлгәшә алмайҙар. Беҙ Себер приказын танымағанбыҙ ҙа һәм яһаҡ та түләмәгәнбеҙ. Ҡара табындарҙың бер өлөшө приказға буйһоноп, яһаҡ түләгән. Бер өлөшө ҡотҡоға бирелеп, көнбайышҡа күсенгән. Бер өлөшө урыҫ сәйәсәтенә буйһоноп, иленә, халҡына хыянат ҡылып, үҙ халҡына ҡаршы көрәшкән. Киләсәктә лә уларҙың ейәндәре, шул уҡ юлды ҡыуып, империяға тоғро булып, үҙ халҡының ҡанын аҙ ҡоймаған. Әйтәйек, Таймас Шәимов һәм һатлыҡ йән Ҡыҙрас Муллаҡаевтар халыҡ ерен һатып, бик күп урыҫ кешеләрен килтереүгә булышлыҡ иткән, Силәбе, Сыбаркүл, Мейәс, Эткүл, Карагайский, Степной, Верхнеуральск ҡалғаләрен төҙөүгә ер бүлергә ярҙамлашҡан, шул ярамһаҡлығы өсөн тархан дәрәжәләрен алған.

"В 1744 году образовали Оренбургскую губернию в составе Оренбургской, Уфимской, Исетской провинций во главе с воеводами, подчиненными начальникам Оренбургской экспедиции и комиссии башкирских дел. Исетская провинция объединила две волости Ногайской дороги и 11 волостей Сибирской дороги. Остальные башкирские волости находились в составе Уфимской провинций", - тип яҙа тарих фәндәре докторы Әнүәр Әсфәндийәров.

Бына шулай һәр төрлө бүлгеләү, хакимлыҡ итеү төрҙәрен ойоштора-ойоштора, Уралда Екатеринбург, Ырымбур ҡалалары империяның төп таяныс үҙәгенә әүерелә. Билдәле, был бүленештәр араһында үҙ-ара тиҙ аралашыу, хәбәрләшеү өсөн тура юл кәрәклеге хәжәте тыуа.

Әгәр империя кимәлендәге күрһәтмәләрҙе тиҙ генә Екатеринбург йәки Ырымбур губернаһына еткереү кәрәк булһа, приказ йөрөтөүсе тура юлдан йөрөгән. Ул юл Екатеринбург - Златоуст - Уралтау аша - Ҡаҙаҡ кисеүе - Нәрәле алды - Ҡужай - Кинйәкәй - Абҙаҡ - Малай Муйнаҡ осо менән Аҡкужаны унда ҡалдырып, Илтабан ауылынан Ҡарҡасты урманының көнсығыш яғынан Яулыҡасты яғалап, Талышман яны менән кисеүен сығып, Йәйыҡ буйлап, хәҙерге Баҙарғолға килә. Ишкен, Иҫтамғол, Уральск ҡасабаһының көнсығышында тау-түбәләр арты менән Ташҡыя ауылы яны менән Йәйыҡты кисеп, Мәсҡәү ауылы аша Верхнеуральскиға бара. Арыяғы һәр редутҡа, ҡалғаға кереп, Ырымбурға йүнәлә. Беҙҙең район аша үткән был юл Кәтерин юлы тип атала. Кантонлыҡ идаралығы индерелгәс, үҙ ере аша үткән юл өлөшөн тигеҙләү, күперҙәр һалыу кеүек эште кантон башлыҡтары ҡарарға тейеш була. 1824 йылдың сентябрь айында Златоустҡа батша Александр I килә. Билдәле, ул йылдарҙа батша ла ат арба-көймәләндә йөрөй. Шул йылда ғына асылған Мейәс ҡалаһында сиркәүҙә, госпиталдә булғандан һуң, Ҡаскын алтын приискыһын ҡарай. Батша килеүҙән өс сәғәт кенә алда 1824 йылдың 23 сентябрендә алтын йыуыу соҡоронан башҡорт малайы 8 ҡаҙаҡ 7 мыҫҡал саф алтын киҫәге таба. Был, әлбиттә, осраҡлы хәл була. Уны мастеровой Дементий Петров тапҡан, тип батшаға бүләк итәләр. Башҡорт малайы эшләгән берләшмәнең һаҡсыҡарауылсыһы Дементий Петров була. "Был - яҡшы билдә", - тип ҡыуана батша. Ҡулына көрәк алып, үҙе лә ҡом ҡаҙып, йыуҙырып, 60 мыҫҡал алтын ала. Батшаны Таштүбәлә үк ҡаршы алған Златоуст тау заводтары начальнигы Степан Петр улы Татаринов II дәрәжә Анна ордены менән бүләкләнә. Батша исеменән 135 кешегә - 1000 һум, ә ҡалғандарға һәр береһенә 1 һум 50 тин бирәләр. Башҡорт малайы күпме аҡса алды икән, билдәһеҙ.

Был ваҡиғаларҙан һуң ул тағы ла Мейәс ҡалаһында булып, Мөхәмәтйән Бүҙәкәйев кантон менән осраша. Бер эскадрон драгундар һәм башҡорт казактары оҙатыуында улар Кәтерин юлы менән Малай Муйнаҡ ауылына кереп, Бүҙәкәйев кантондың өйөндә ҡунаҡ булып, артабан юлланалар. Батша Александр I үҙенең көймәһендә артабан Кәтерин юлы буйынса Үрге Урал ҡалғә-төрмәһенә килә.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**

**(Дауамы. Башы 5-9-сы һандарҙа).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Ҡуяндарға һәм төлкөләргә башҡорттар махсус тоҡомло эттәр - таҙы - менән һунар иткән. Улар нәҙек оҙон аяҡлы, оҙон осло моронло, енел кәүҙәле булған; бындай эттәр муйыны ҡуйы йөнлә бурҙайға оҡшаш. Күрәһең, башҡорттарҙа башҡа тоҡомло һунар эттәре лә булған. П. С. Паллас һүҙҙәренә ҡарағанда, башҡорттар һыуһарға ла, хатта айыуға ла эттәр менән йөрөгән. Эләксен тибындағы эттәр менән шәшкегә, бурһыҡҡа, һыуһарға һунар иткәндәр.

Элекке ваҡыттарҙа ялан башҡорттары бүрегә, төлкөгә һәм һыуһарға бөркөттәр ярҙамында ла һунарға сыҡҡан. XVIII быуаттың икенсе яртыһында ла башҡорттарҙың ҡоштар ярҙамында һунар итеүе тураһында мәғлүмәт бар.

Башҡорттарҙың һунарсылығына күҙәтеүҙе тамамлап, һунарсының ҡоралланыуына, артель һунарына һәм һунар территорияһына ла туҡталып китергә кәрәк. Башҡорттарҙың һунар өсөн махсус кейеме булмаған (бышымлы ҡыныйраҡ менән бышымлы сабатаны иҫәпкә алмағанда). Был аяҡ кейеме атлап йөрөгәндә лә, саңғыла шыуғанда ла уңайлы булған. Быға тиклем яҙған һунар ҡоралдарынан тыш, төньяҡ-көнсығыш башҡорттары аҙыҡ-түлек һалыу йәки үлтерелгән кейекте һалыу өсөн махсус ҡулайлама - алап аҫып йөрөткән. Алап - дуға рәүешендә бөгөлгән талға үрелгән йүкәнән һәм уның эске яғынан туҙ ҡуйып тегелгән һауыт.

Тарихи документтарҙа башҡорттарҙың һунарға ҙур булмаған төркөмдәр менән сығыуы теркәлә. Бындай һунар януарҙы ҡырпаҡ ҡар өҫтөнән, бүреләрҙе һыбай баҫтырғанда, ыласын һунарында урын алып торған. Ҙур хайуандарға - болан йәки мышыларға башҡорттар күп кешелек артелдәр менән һунар иткән һәм ҡайһы берҙә хайуанды аҙналар буйына эҙәрлекләгәндәр. Үлтерелгән хайуандың ите һунарҙа ҡатнашыусылар араһында тигеҙ итеп өләшенгән.

Башҡорттар йәшәгән территория борондан уҡ айырым ҡәбиләләр араһында бүленгән. Башҡорттарҙың рус подданныйлығына күсеүе менән был ерҙәргә хоҡуҡ айырым ырыуҙарға беркетелгән. Ырыу ерҙәре аймаҡтарға бүленгән. Аймаҡтар эсендә түбәләр ҙә булған. Ерҙәрҙе бүлгеләү, ваҡлау артабан да дауам иткән һәм һәр ғаилә үҙенең еренә эйә булған. Һунарсылыҡ кәсебе ерҙәре ошо ғаиләнең, дөрөҫөрәге, уның яһаҡ түләгән башлығының йәки туғандаш ғаиләләрҙең милке булып торған. Махсус яҙмалар буйынса аҫаба ерҙәренә дөйөм идара итеү хоҡуғында ҡерҙәштәр йәки сит кешеләр индерелгәс, артабан был хоҡуҡтар күберәк кешеләр төркөмөнә таралған. Әммә һәр ваҡыт, тотолған йәнлек оброкка тапшырыла икән, билдәле бер аҫаба ерендә припущенник йәки ҡуртымға алыусы ниндәй шарттарҙа йәнлек аулай алыуы ентекле билдәләнгән.

Башҡорттар XVII-XVIII быуаттарҙа төркөмдәр менән күрше ҡаҙаҡтарҙың йәки ҡалмыҡтарҙың ерҙәренә һунарға сыҡҡан һәм йыш ҡына бында һунар хәрби бәрелеш менән тамамланған.

*КИТАБЕННАС*

# КҮПТӘН КӨТКӘЙНЕК...




**Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә "Башҡортостан - әүлиәләр иле" тигән китап донъя күрҙе. Китапты төҙөүселәр: билдәле йәмәғәт эшмәкәре Салауат Килдин, "Аманат" журналының баш мөхәррире, журналист Сәлмән Ярмуллин һәм ғалимә, филология фәндәре кандидаты Фәнирә Ғайсина.**

Кемдәр улар әүлиәләр һәм ишандар, уларҙың халҡыбыҙҙың рухи тормошонда билгән урыны нимәгә ҡайтып ҡала? Сәхәбәләр башҡорт иленә ҡасан килгән? Суфыйсылыҡтың, тәриҡәттең башҡорт ерлегендә барлыҡҡа килеүенең сәбәптәре нимәлә? Башҡорт халҡының рухи короле Зәйнулла ишан Рәсүлев, уның арҡадаштары Ғатаулла ишан, Ғабдулла Сәиди хаҡында беҙ нимә беләбеҙ? Кемдәр улар Йәғәфәр, Мораҙым, Байым, Ҡараҡай, Сәхиулла, Ғарифулла, Фәйзулла, Ғиләжетдин, Мәхмүт, Сисәнбай ишандар, Ғәзизйән, Гәүһәриә, Әхтәм, Мәрфуға әүлиәләр, Илъяс, Миндейәр мәзиндәр, Әхмәтбаҡый, Хәлиулла, Мөжәүир, Ниязғол, Әбделғәлим, Сабир хәҙрәттәр, Шәмиғол хәлфә, Абдулла, Фазлетдин муллалар, улар ҡайҙа һәм ҡасан йәшәгән? Башҡорт бәйғәмбәрен Йылайыр районы Ҡәзерша ауылы янындағы аяҡ эҙҙәрен күргәнегеҙ бармы? Йәйге таш мәсеттәр хаҡында беҙ нимәләр беләбеҙ? Ишандарыбыҙ, хәҙрәттәребеҙ, әүлиәләребеҙ хаҡында халҡыбыҙ хәтерендә һаҡланып килгән хәтирә-риүәйәттәр менән һеҙ таныштығыҙмы? Башҡорт шәйех-ишандары, әүлиәләре, изгеләренең тыуған-йәшәгән ерҙәре, ерләнгән урындары, әүлиә шишмәләре, әүлиә тауҙары хаҡындағы киң мәғлүмәт менән таныштығыҙ бармы? Аҫҡын, Ауырғазы, Баймаҡ, Белорет, Борай, Ғафури, Дыуан, Ейәнсура, Иглин, Йылайыр, Көйөргәҙе, Күгәрсен, Ҡариҙел, Ҡыйғы, Ҡырмыҫҡалы, Миәкә, Мәсетле, Мәләүеҙ, Нуриман, Салауат, Тәтешле, Учалы, Шишмә, Хәйбулла, Әбйәлил, Әлшәй, Яңауыл райондарында, Өфө ҡалаһында, Силәбе, Һарытау, Һамар, Ҡорған өлкәләрендә, Татарстандың Минзәлә районында ниндәй изге башҡорт әүлиәләре, ишандары, хәҙрәттәре һәм муллалары ерләнгән? Мосолман башҡорттарҙың әүлиә ҡәберҙәренә зыярат ҡылыу йолаһы нисек башҡарыла? Зыярат ҡылыу тәртибе нисек?

Ошо һәм башҡа бик күп һорауҙарға яуаптар табырға була "Башҡортостан - әүлиәләр иле" китабында.

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ.**

**✓ *Ҡыҫҡаса энциклопедияны инглиз теленә тәржемә итеп баҫтырыу тәҡдиме менән Хөкүмәткә сыҡтыҡ. Уны 2015 йылға өлгөртөргә уй бар. ШОС һәм БРИКС саммитына килгән ҡунаҡтарға бик яҡшы файҙалы бүләк булыр ине.***



**Былтыр "Башҡорт энциклопедияһы" ғилми нәшриәт комплексы "Башҡортостан энциклопедияһы"ның һуңғы етенсе томын баҫтырып сығарҙы. Әммә, ҡайһы берәүҙәр фаразлауынса, нәшриәттең ошоноң менән эше тамам булманы. Ижади коллектив яңы проекттар өҫтөндә әүҙем эш алып бара. Ошо көндәрҙә уҡыусылар иғтибарына "Башҡорттарҙың хәрби тарихы" энциклопедияһы тәҡдим ителде. Бынан тыш, республиканың төрлө районлары, ойошмалар, айырым шәхестәр хаҡында тематик йыйынтыҡтар әҙерләнә. Ҡыҫҡаһы, нәшриәт энциклопедистиканың яңы офоҡтарын аса һәм башҡорт фәненә, тарихына үҙ өлөшөн индерә. Был юлы беҙ "Башҡортостан энциклопедияһы" ғилми нәшриәтенең генераль директоры Уйылдан Ғилман улы СӘЙЕТОВ һәм уның беренсе урынбаҫары Клара Ишбулды ҡыҙы ӘҒЛИУЛЛИНА менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**▸ Һәр милләт үҙенең йылъяҙмаһын, тарихын яҙырға, уны киләһе быуындарға тапшырып ҡалдырырға тырыша. Был мәғлүмәттәрҙе һаҡлау, теҙеү-урынлаштырыуҙың иң һәйбәт, иң ҡулайлы ысулы - ул энциклопедия баҫмаһы. Бөгөн башҡорттар үҙенең йылъяҙмаһын энциклопедияға теркәү буйынса Рәсәйҙә, мәҫәлән, ниндәйерәк урын биләй?**

**У. Сәйетов:** "Башҡортостан" ҡыҫҡаса энциклопедияһының донъя күреүе республиканың ғына түгел, Рәсәй Федерацияһының да ижтимағи



**▸ Әлегә Башҡортостан энциклопедияһы рус телендә генә нәшер ителгән. Башҡа илдәрҙә лә беҙҙе танып белһендәр өсөн энциклопедияны башҡа сит телдәргә тәржемә итеү планлаштырыламы? Ә иң мөһиме, был ете томлыҡ башҡортсаға тәржемә ителәсәкме?**

**К. Әғлиуллина:** Башҡорт телендәге энциклопедия рус телендәгеһенән бер аҙ айырыласаҡ. Башҡортса вариантта башҡорт халҡына бәйле мәғлүмәттәргә күберәк урын биреләсәк. Тарихыбыҙға, бөгөнгөбөҙгә бәйле ваҡиғалар, факттар тулыраҡ яҡтыртыласаҡ. Миҫал өсөн, рус вариантында Пермь, Ырымбур, Силәбе һәм башҡа төбәктә йәшәгән милләттәштәребеҙ тураһында дөйөмләштерелгән мәғлүмәт кенә урынлаштырылһа, энциклопедияның башҡортса вариантында башҡорттар күп йәшәгән ауылдар, тарихы беҙҙең халыҡ менән бәйле тораҡ пункттары, тарихи Башҡортостан ерҙәренә ҡараған, әммә икенсе төбәктәрҙә ҡалған тап кәштәһендә мотлаҡ К.Маркстың, Лениндың йыйылма әҫәрҙәре, Ҙур Совет энциклопедияһы торор ине. Бөгөн күп етәкселәр беҙҙең энциклопедияны тотоп та ҡарамаған. Был аянысլы күренеш. Дәүләттең, халыҡтың үҫешен сағылдырған, баһалап бөткөһөҙ мәғлүмәт туплаған, суверенлыҡ атрибуты булған китапты ҡулына ла алмаған кешене интеллигент тип һанауы ҡыйын. Интернет булғанда, энциклопедияның кәрәге юҡ, тигән алама фекерҙең эҙемтәһе был.

**К. Әғлиуллина:** Электрон китап менән ғәҙәти китап йәнәш үҫергә тейеш. Улар бер-береһенә ҡамасауламай. Ләкин мөһим бер проблема бар - ул китаптарҙы һатыу. Бөгөнгө көндә республикала был эшмәкәрлек бик ныҡ аҡһай. Махсус магазиндар ҙа, килем артынан ҡыуып, үтемлерәк баҫмаларҙы ғына һатыуға ала. Төбәк баҫмаларына,



рыуға мендән ашыу кеше йәлеп ителде. Эйе, баштараҡ авторҙар табыу, уларҙы дөйөм эшкә йәлеп итеү ҡыйыныраҡ булһа, бөгөнгө көндә был йәһәттән ауырлыҡ юҡ, авторҙар үҙҙәре киләләр, хеҙмәттәрен тәҡдим итәләр. Энциклопедияның тотҡарлыҡһыҙ сығыуы, быға халыҡтың ихтыяжы булыуы үҙ ролен уйнамай ҡалмай. Шулай уҡ авторҙар нәшриәттең башҡа проекттарында ла әүҙемлек күрһәтәләр. Әлеге мәлдә улар беҙ биргән заданиелар буйынса эшләйҙәр. Үҙҙәре яңы проекттар тәҡдим итеп, инициатива күрһәтһәләр, тағы ла яҡшыраҡ булыр ине. Беҙ уларға булышлыҡ итергә әҙер.

**У. Сәйетов:** "Аяҡлы энциклопедия"ға килгәндә, халыҡ телендә был нығынған һүҙбәйләнеште ҡулланыу ҡабул ителһә лә, беҙ был мәсьәләгә икенсе күҙлектән ҡарайбыҙ. Бөгөнгө көндә фән ныҡ үҫешкән, уның тармаҡтары күп, төрлө ҡараштар

# МИЛЛӘТ ЙЫЛЪЯҘМАҺЫ...

## ете томлыҡ энциклопедияла теркәлгән

тормошонда әһәмиәтле ваҡиға булды. Ул республиканың - беренсе, совет осоронан һуңғы Рәсәйҙә шулай уҡ беренсе милләт-төбәк энциклопедияһы ине. Ә инде 1997 йылда баҫмаға әҙерләнгән, әммә финанс ҡыйынлыҡтары арҡаһында 2000 йылда ғына донъя күргән башҡорт телендәге варианты Рәсәй халыҡтарының бер вәкиленең туған телендә сыҡҡан беренсе китабы булды. Бөгөн энциклопедия эшләү буйынса беҙ Рәсәйҙә Новгород өлкәһе менән беренсе урынды бүлешәбеҙ. Ләкин новгородлылар сығарған китаптарҙың күпселеген аҙ битле брошюралар тәшкил итә. Милли республикаларға килгәндә, шулай уҡ беҙгә етеүсе юҡ. Татарстан энциклопедия эшенә алданыраҡ тотонһа ла, был эштә артта бара. "Башҡортостан" ҡыҫҡаса энциклопедияһы Рәсәй төбәктәре өсөн өлгө булды. Сыуаштар, яҡуттар, Тау Алтайы республикаһы үҙ йыйынтыҡтарын эшләгәндә беҙҙең моделгә таянды. Әлеге мәлдә молдавандар һәм украиндар Башҡортостан тәжрибәһен өйрәнә. Дәүләттең энциклопедияһы булыуы - ул дәүләтселек, үҫешкәнлек күрһәткесе. БМО танығын өсөн дә, энциклопедия булыуы төп талап, тигән рәсми документтар бар. Энциклопедия сығарыу, ғөмүмән, еңел эш түгел ул, бының өсөн көслө ғилми база кәрәк. Донъяла үҙ энциклопедияларын төҙөмәгән дәүләттәр бар, ә Рәсәйҙең 9 төбәгендә бындай китап бөтөнләй юҡ.

**У. Сәйетов:** Сит телдәрҙә нәшер итеүгә килгәндә, ошоға тиклем был эшкә тотонорға форсат булманы. Бар көс күп томлыҡты эшләүгә йүнәлтелгәйне. Әле бер аҙ бушаныҡ. Шуға күрә лә, ҡыҫҡаса энциклопедияны инглиз теленә тәржемә итеп баҫтырыу тәҡдиме менән Хөкүмәткә сыҡтыҡ. Уны 2015 йылға өлгөртөргә уй бар. ШОС һәм БРИКС саммитына килгән ҡунаҡтарға бик яҡшы файҙалы бүләк булыр ине, тип уйланыла. Идея хуплау табып, финанс бүленһә, беҙ планыбыҙҙы тормошҡа ашырырға әҙербеҙ. Ә инде ете томлыҡты башҡорт телендә сығарыу буйынса эш тулы көс менән бара. Тик финанс ҡыйынлыҡтар арҡаһында, был китаптарҙы нәшерләү билдәһеҙ ваҡытҡа кисектерелеп торҙо. Әле беҙ беренсе, икенсе, өсөнсө томдарҙың электрон варианты өҫтөндә эшләйбеҙ.

районлар хаҡында мәғлүмәт таба аласаҡ уҡыусы.

**▸ Электрон вариантҡа күсеү уңайлы, арзан, шул уҡ ваҡытта ышанысһыҙ. Ләкин бөгөн күп мәғлүмәт электрон вариантта һаҡлана. Китаптарҙың яҙма варианттары һаҡланһын өсөн электрон вариант һәм ғәҙәти китап нисбәте ниндәй булырға тейеш?**

**У. Сәйетов:** Нисбәте бармы, юҡмы, әммә электрон китап та, ҡәҙимге китап та булырға тейеш. Ҡасандыр телевидение барлыҡҡа килгәндә, радио бөтәсәк, тип фаразлағайнылар. Интернеттың да килеп сығыуы радионы, телевидениены бөтөрмәне бит. Рәсәй китап сегментының бөгөнгө хәленә килгәндә, бар китаптарҙың 95 процентын ҡәҙимге, ҡағыҙ китаптар тәшкил итә. Ләкин бөгөн төп мәсьәлә китаптарҙың сығыу-сыҡмауында түгел, ә уларҙың уҡылыуында. Совет заманында һәр етәксенең ки-

башҡорт китаптарына, шулай уҡ беҙҙең энциклопедияларға был эшҡыуарҙар ҡыҙыҡһыныу белдереп бармай. Хеҙмәттәшлек итһәләр ҙә, уҡыусыға хаҡтарын икеләтә күтәреп тәҡдим итәләр. Шуға күрә лә беҙ үҙебеҙҙең магазиндарҙы аса башлаясаҡбыҙ. Етештергән тауарыбыҙға ихтыяж бар, киләсәктә уны таратыу, һатыу эше лә яйға һалынасаҡ, тип ышанғы килә.

**▸ Энциклопедиялар бары тик редакция хеҙмәткәрҙәре тырышлығы менән генә төҙөлә алмай. Уның эшендә төрлө өлкә белгестәре, ғалимдар ҙа ҡатнашырға тейеш. Уларҙы йәлеп итеү буйынса һеҙҙә эш нисек ҡуйылған? Авторҙар, ғалимдар араһында "аяҡлы энциклопедия" тип әйтерлек кешеләр бармы?**

**К. Әғлиуллина:** Энциклопедияның һәр томын эшләгәндә 800-гә яҡын белгес-автор ҡатнашты. Ете томлыҡты сыға-

***Бөгөн энциклопедия эшләү буйынса беҙ Рәсәйҙә Новгород өлкәһе менән беренсе урынды бүлешәбеҙ. Ләкин новгородлылар сығарған китаптарҙың күпселеген аҙ битле брошюралар тәшкил итә. Милли республикаларға килгәндә, шулай уҡ беҙгә етеүсе юҡ. Татарстан энциклопедия эшенә алданыраҡ тотонһа ла, был эштә артта бара. "Башҡортостан" ҡыҫҡаса энциклопедияһы Рәсәй төбәктәре өсөн өлгө булды. Сыуаштар, яҡуттар, Тау Алтайы республикаһы үҙ йыйынтыҡтарын эшләгәндә беҙҙең моделгә таянды. Әлеге мәлдә молдавандар һәм украиндар Башҡортостан тәжрибәһен өйрәнә. Дәүләттең энциклопедияһы булыуы - ул дәүләтселек, үҫешкәнлек күрһәткесе. БМО танығын өсөн дә, энциклопедия булыуы төп талап, тигән рәсми документтар бар.***

йәшәй. Бер кешенең генә бөтә өлкәләрҙе, бөтә тармаҡтарҙы ла белеүе мөмкин түгел. Шуға ла Ломоносов кеүек бер нисә фәнде яҡшы белгән кешене хәҙер табып булмаясаҡ. Беҙҙең эштә төплө белем кәрәк. Кеше бер өлкәлә генә ныҡлап шөғөлләнһен, ләкин үҙ өлкәһенең белгесе, һөнәренең оҫтаһы булһын. Беҙҙең талап ошо.

Тарихта бер кешенең генә энциклопедия сығарған саҡтары булған. Урал-Иҙел буйында йәшәгән билдәле мосолмандар хаҡында "Аҫар" китабын яҙған Ризаитдин Фәхретдиновты телгә алырға була. Әммә ҡағиҙә булараҡ, энциклопедияның авторҙар коллективы менән эшләнеүе ҡабул ителгән. Башҡаса мөмкин түгел. Энциклопедия - ул заман фоторәсеме һәм ҡыҫҡа ваҡытта әҙерләнергә тейеш. Бер кеше ниндәй генә белемле булмаһын, бар теманы яҡтырта, тулы анализ бирә алмай. Һәр фән үҫештә, тимәк, энциклопедистика ла бер урында тормай. Ул даими рәүештә яңыртыуҙарҙы, өҫтәүҙәрҙе талап итә. Бер тикшеренеүҙә билдәләнеүенсә, 4-5 йылдан һуң энциклопедия материалы 20 процентҡа иҫкерә. Бынан сығып, бер энциклопедия ғүмере 25 йыл самаһы ғына, тип әйтергә була. Әммә тарихи документ булараҡ, ул быуаттарға ҡала.

**▸ Һеҙҙең нәшриәт күрһәтә башлаясаҡ хеҙмәттәр араһында шәжәрә төҙөү ҙә бар. Ә бына бар башҡорт халҡының генеалогик ағасын төҙөү**

**мөмкин булғандай эшме? Был хаҡта уйланғанығыҙ юҡмы?**

**К. Әғлиуллина:** Эйе, беҙ киләсәктә архив хеҙмәткәрҙәре бергән мәғлүмәттәр нигеҙендә кешеләргә шәжәрәләрен эшләп бирергә ниәтләп торабыҙ. Ә халҡыбыҙҙың генеалогик ағасын төҙөүгә килгәндә иһә, ул, беренсенән, бик ауыр эш һәм материалдар табыу ҡыйынға тура киләсәк. Архивта эшләүселәр әйтеүенсә, мәғлүмәттең төп өлөшө иҫке төрки телендә. Ә был өлкәлә беҙҙең белгестәр аҙ. Бынан тыш, күп факттар буйынса мәғлүмәт юҡ. Һылтанмала күрһәтелгән ҡайһы бер сығанаҡтар архивтарҙа һаҡланмаған. Икенсенән, был эштең кәрәге бармы икән? Саманан тыш тарихын соҡоу менән шөғөлләнгән, бөгөнгөһөн күрмәгән һәм киләсәкте күҙаллмаған халыҡ һәләкәткә дусар буласаҡ, тип әйтәләр бит. Шәжәрәһен күпме кимәлдә белеүҙе кеше үҙе хәл итергә тейеш. Ете быуынындағы туғандарын белһә лә бик яҡшы, тәрәнерәк өйрәнгеһе килһә, быныһы унын үҙенең ихтыярында. Әммә бар халыҡтың шәжәрәһен эшләү тураһында һүҙ алып барыу, минеңсә, ваҡытһыҙ.

**У. Сәйетов:** Тарихты өйрәнергә кәрәк, әммә ошоноң менән генә шөғөлләнеү дөрөҫ түгел. Министр булып эшләгән сағымда Мәскәүҙең Измайлово паркында мәҙәни сарала ҡатнаштыҡ. Ата-бабаларыбыҙҙың тарихын, мәҙәниәтен сағылдырырға булдыҡ, ҡәҙимгесә тирмәләр ҡороп ебәрҙек. Ғорурланып йөрөгән булабыҙ. Кешеләр килә лә: "Башҡорттар һаман да шулай йәшәйме ни?" - тип һорау бирәләр. Һиҙелеп та, халҡыбыҙ өсөн бөгөнгө көн мөһимерәк бит. Ошо урында, ошо ваҡытта һин кем, халҡың кем, дәүләтең нindәй? Тимәк, халҡыбыҙҙың бөгөнгө көнөн дә лайыҡлы итеп күрһәтә белергә өйрәнергә тейешбеҙ. Был йәһәттән татар ҡәрҙәштәр әҙүм эшләй. Улар бөгөн Рәсәйҙә һәм сит илдәрҙә йәшәгән бар билдәле милләттәштәрен беләләр. Шулай уҡ ярымтатарҙар хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе лә күҙҙән ысҡындырмайҙар. Энциклопедияларына, был шәхестең атаһы йәки әсәһе татар булған, тип яҙып ҡуялар, уларҙың ҡаҙаныштары менән ғорурланалар. Үкенескә күрә, был йәһәттән беҙ ҡалышабыҙ. Телмәрендә саҡ ҡына "с" хәрефе ысҡындымы, милләттәшебеҙҙән башҡортлогонда шикләнә башлайбыҙ. Шулайтып, күпме башҡортобоҙҙо юғалтыҡ...

**▸ Энциклопедия -заман фотоһәсеме, тип әйтеп үттегеҙ. Ә был фотоһәсем ысынбарлыҡтың теп-теүәл сағылышымы, әллә ул барыбер сәйәси режимдан, дәүләттә ҡабул ителгән нормаларҙан ситкә тайпыла алмаймы?**

**К. Әғлиуллина:** Энциклопедияларҙа шәхестәргә, ваҡиғаларға баһа биреү тәүмаҡсат түгел. Уҡыусыға мәғлүмәт тәҡдим ителә, ә кеше мәкәлә, китап артындағы һылтанмалар аша темаңы тәрәнерәк өйрәнеп, ҡараштарынан сығып, был мәғлүмәткә үҙ баһаһын бирә. Бер үк ваҡиғаға, күренешкә, кешегә төрлө ҡараштар булыуы мөмкин. Энциклопедияла тарихта тәрән эҙ ҡалдырған ваҡиғалар урын ала.

**У. Сәйетов:** Баһа бирмәһәк тә, бер гуманитар фәндең дә идеологиянан ситтә тороп ҡала алмауын иҫтән сығарырға ярамай. Ул йә дәүләттә барған идеологияны яҡлай, йә уға ҡаршы сығыш яһай. Энциклопедия бар фәндәрҙе лә туплаусы йыйынтыҡ булараҡ, шулай уҡ йәмғиәт, дәүләт йөғөнтөһөнән айырыла алмай, сөнки ул шул фәндәрҙең сығанаҡтарына таяна. Әлек совет идеологияһын нығытһаҡ, СССР тарҡалғас, яңы ҡараштарҙы күрһәтеү кәрәк булды. Ошо маҡсатта Рәсәй энциклопедияһын сығарыу ихтыяжы килеп тыуҙы.

Ҙур үҙгәрештәргә сәбәпсе булған энциклопедиялар ҙа билдәле. Мәҫәлән, 18-се быуатта француз интеллигенцияһы менән йәшерен рәүештә эшләнгән Француз энциклопедияһы буржуаз революцияға килтерһә, теүәл фәндәр ғалимдары, техниктар тарафынан әҙерләнгән Инглиз энциклопедияһы фәнни-техник революцияға этәргес була.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ошо көндәрҙә "Башҡорт энциклопедияһы" ғилми нәшриәт комплексында "Башҡорттарҙың хәрби тарихы" тип аталған сираттағы энциклопедия баҫылып сыҡты. Был йыйынтыҡта тарихи Башҡортостан ерләгенә, халҡыбыҙға бәйле бөтә хәрби ваҡиғалар, хәрби шәхестәр хаҡында мәғлүмәт тупланған. Мәҫәлән, 1812 йылдарҙағы Ватан һуғышында ҡатнашҡан 20 башҡорт полкының һәр береһе, Граждандар һуғышында аҡтар һәм ҡыҙылдар яғында ла йөрөгән бөтә хәрби берәмектәр тураһында мәкәләләр бар. Шулай уҡ, энциклопедияла быға тиклем киң йәмәғәтселек иғтибарына сығарылмаған тарихи фотоһәсемдәргә, карталарға, документтарға урын бирелә. Аңлашылмаусылыҡтар арҡаһында һәм ҡатмарлы сәйәси ваҡиғалар сәбәпле онотолған мәшһүр башҡорт офицерҙары хаҡында ла уҡый аласаҡ унда уҡыусы. Энциклопедияны төҙөүҙә ҡатнашҡан Азат Ярмуллин миҫалға Рауил Сыртланов исемле милләттәшебеҙҙе килтерҙе. Ул Петербургтағы хәрби академияны тамамлап, батша Рәсәйендә генерал дәрәжәһенә етә. Беренсе Бөтә донъя һуғышында, һалдаттарын яуға әйҙәп барғанда, дошман ҡоралынан батырҙарса һәләк була. Күп миҙалдар кавалеры, шулай уҡ Георгий орденына лайыҡ булған әлегә билдәле берҙән-бер башҡорт ул. Совет замана осоронда уның исеме бер нисә тиҫтә йылға онотолоп тора.**

Азамат САЛАУАТОВ яҙып алды.

ЙӘШТӘР ҠОРО

# МОҢ ТЫНМАҺА...

## ғаләм мәңге йәшәр

(Башы 6-сы биттә).

**Заһит:** Музыкаль әҙәбиәт, гармония, сольфеджио, төрлө көйҙәр ятлау, бер нисә төр музыка ҡоралында уйнау, дирижерлыҡ серҙәрен төшөнөү - былар хәтерҙе нығыта, ихтыяр көсө тәрбиәләй. Элегерәк нимәләр килеп сыҡмаған ваҡытта хатта ултырып илағы килгән саҡтар була ине. Хәҙер инде үҙеңде ҡулға алаһың һәм тағы ла ҙурыраҡ нығышлыҡ менән эшкә тотонаһың. Тормошта конкурентлыҡҡа һәләтле кеше булам тиһәң, хәтер, тырышлыҡ бик кәрәк. Унан һуң, һәр көн сәхнәгә сығыу, концертта ҡатнашыу үҙеңде тоторға ла өйрәтә. Шуға ла был гимназия беҙҙе заман алдында юғалып ҡалмаясаҡ белгес итеп әҙерләй.

**Хәйҙәр:** Музыка ҡоралында һәр кеше уйнай ала. Быңа нота өйрәтһәк, бер ай эсендә һеҙ ҙә берәй музыка ҡоралында уйнарға өйрәнә аласаҡһығыҙ, кешенең мөмкинлектәре сикһеҙ ул. Әммә музыканы аңларға ла кәрәк, бында хистәр тәрәнлеге лә мөһим. Кешегә барып етһен өсөн шундай итеп бирелеп уйнарға тейешһең, тамашасы тетрәнеп, илап ултырасаҡ. Шуға ла музыка беҙҙең өсөн әле шөғөл дә, ғүмерлек мауығыу ҙа, үҙеңдең хыялдарыңды тормошҡа ашырыу мөмкинлеге, бәлки, һөнәр ҙә буласаҡ.

**Гөлиемеш:** Тимәк, ысын музыкант булыу өсөн төп шарттарҙың береһе - һәләт. Кемдер ятлап уҡый, кемдер һәләте булғанға күрә, ятламаһа ла имтихандарын яҡшы итеп тапшыра. Быңа ошо икенсе төркөмдөң һәләтенә тырышлыҡ та һалынһа, ул хатта даһи кимәленә күтәрелеүе мөмкин. Ғөмүмән, бында үҙеңде үҫтереү өсөн бөтә шарттар ҙа бар, компьютер һәм электрон каталог менән йыһазландырылған ике китапхана, интернет, лингафон, тауыш яҙҙырыу кабинеттары... Хатта эмоциональ көсөргәнештән арыныу өсөн релаксация бүлмәһе, ҡышҡы баҡсабыҙ ҙа бар! Уҡытыусылар, тәрбиәселәребеҙ беҙҙе шәхес булараҡ аса, белем алыуға ҡыҙыҡһыныу уята, профессиональ оҫталыҡҡа өйрәтә.

**Айзилә:** Бәләкәйҙән йырлап-бейеп үҫкәнгә был уҡыу йортон һайлаһаҡ та, хәҙер икенсерәк маҡсаттар күҙаллана башланы. Музыка йүнәлеше буйынса һөнәр һайламаған осраҡта ла, ул беҙгә гел юлдаш буласаҡ.

**Хәйҙәр:** Музыка тормошта ныҡ ярҙам итә, тигән фекер менән дә тулыһынса килешәм. Минең төп музыка ҡоралым - баян. Ҡыйын ваҡыттар булып китһә, баяныңды ҡулыма алып, илһамланып уйнай башлайым, күңелгә шунда уҡ рәхәт булып китә.

**▸ Һуңғы осорҙа бөтөн донъяла этник музыкаға ҡараш ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе. Һеҙ быға нindәй аңлатма бирер инегеҙ?**

**Хәйҙәр:** Халыҡтар һәм мәҙәниәттәр араһында үҙара аралашыу мөмкинлеге, башҡа милләттәр менән ҡыҙыҡһыныу арта бөгөн. Кешелек бер үк ваҡытта бер төрлөгә әйләнергә, бер үк ваҡытта күп төрлө булыуын һаҡлап ҡалырға тырыша кеүек. Быңдай шарттарҙа тап этник музыка беҙҙе башҡаларҙан айырып та тора, улар араһында таныта, билдәле лә итә. Ошоноң менән бәйле түгелме икән этник музыкаға тартылыу? Этник музыкаҡың нигеҙендә халыҡ музыка ҡоралдарының ысын тауышы ята, унда милли моңға хас үҙенсәлектәр ҡулланыла, уны тыңлағанда ирек, азатлыҡ тойғолары уяна.

**Заһит:** Хатта бүлмәлә ултырғанда интернат коридоры буйлап берәйһе ҡумыҙҙа уйнап үтеп китһә, йәки өҙләгән тауышты ишетһәң, күңелгә рәхәт булып китә. Этник музыкаға ҡараш үҙгәрә икән, тимәк, беҙҙең халыҡтың музыка сәнғәте юғалмай. Был ата-бабаларыңды онотмау, уларға дан йырлау ҙа булып яңғырай төҫлө.

**Айзилә:** Гимназияға уҡырға килгәс, башта фортепианола ғына уйнаным, шулай ҙа ҡыл ҡумыҙға гел ҡыҙығып ҡарай инем, 8-се класта ҡыл ҡумыҙға күстем. Боронғо башҡорт халыҡ инструментын бөтөн донъяға күрһәткем, таныткым килә. Ысынлап та, этник йүнәлештәге бәйгеләр ҙә күбәйҙе хәҙер, күптән түгел Ҡаҙанда үткән "Этномериада" Бөтөн Рәсәй асыҡ традицион художество мәҙәниәте конкурсында ҡатнашып, дипломант исеменә лайыҡ булдыҡ. Хәйҙәргә махсус бүләк тә тапшырылды.

**Хәйҙәр:** Борондан халҡыбыҙҙа, ысын егет ҡурайҙа уйнай белергә тейеш, тигән яҙылмаған ҡанун йәшәй. Мин дә быңың менән килешәм, сөнки ҡурай ул халҡыбыҙҙың тарихы, бөгөнгөһө. Ҡурайсылар, шөкөр, күбәйҙе, хәҙер беҙгә донъя киңлегенә сығыу кәрәк. Әлегә быны Роберт Юлдашев ҡына эшләй. Әйткәндәй, гимназияның юбилейында уның менән бергә сығыш яһаныҡ, уның энергияһын "йоҡторҙоҡ". Этник музыкаҡың көсөн шунда тойорға мөмкин булды ла, сәхнәлә онотолоп, илһамланып уйнайһың, энергияңды сығараһың, үҙең дә көс алаһың. Ул саҡта ысынлап та бер урында тик тороп булмай, хатта бейеп китке килә.

**▸ Ошо уҡыу йортонда белем алып, өлгәшкән уңыштарығыҙ араһында үҙегеҙ өсөн иң мөһиме һәм иң ҙурыһы тип нимәне атар инегеҙ?**

**Айзилә:** Иң ҙур уңышым - былтырғы йылда "Йәншишмә" гәзитенең йәш хәбәрсеһе исемен алыуым. Төрлө гәзиттәргә яҙышып тороу шул тиклем күңелемә ятҡан шөғөлдәрҙең береһе. Бөтөн фәндәрҙән "бишле"гә генә өлгәшкәс, гимназияның Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге стипендияһына лайыҡ булдым - быныһы уҡыуҙағы уңышым. Ишмулла Дилмөхәмәтовтың юбилейына арналған республика конкурсында халыҡ инструменттары араһында ҡыл ҡумыҙ буйынса беренсе урын алыуым - халыҡ һәм уҡытыусым Рафаэль Вәлиев алдында йөҙөм яҡты булыуы күрһәткесе. Минә унда бик ҙур бүләк - ҡыл ҡумыҙ бүләк иттеләр.

**Хәйҙәр:** Яңыраҡ ҡына Ҡаҙанда үткән конкурста ҡурайҙа уйнап - дипломант, былтыр VII йәш музыканттар бәйгеһендә шулай уҡ дипломант булдым, Йомабай Иҫәнбаев исемендәге конкурста өсөнсө дәрәжә дипломы алдым. Бәйгеләрҙә ҡатнашып, исемдәр яулауы яҡшы, әлбиттә. Сығыштарым барыһына ла оҡшаһа һәм бынан мин үҙем оло ҡәнәғәтләнеү алһам - минең өсөн иң оло уңышым тип ошоно иҫәпләр инем.

**Заһиҙә:** Халыҡ йырының көйө күңелде дауалай торған бер сихри көскә эйә икәнен тоям, йыр конкурстарына, гимназияла үткән конкурстарҙа ҡатнашып, призлы урындар алам - уларҙың барыһын да һанап бөтөп булмаясаҡ. Яҡшы өлгәшкәнем өсөн Ғ. Әлмөхәмәтов стипендиатымын.

**Гөлиемеш:** Мин ҙур уңышым тип гимназияның "Ҡурай" гәзите мөхәррире булып тороуымды иҫәпләйем. Төрлө конкурстарҙа ҡатнашып йөрөгәнем юҡ әлегә, быңың өсөн һәләтләләр араһында һәләтле булыу кәрәк. Композиция дәресен яратам, йырҙар ҙа яҙам. Беренсе көйҙәремде етенсе класта яҙғайным, тик уларҙы тикшертергә кеше тапманым. Һуңынан гимназияла композитор Нур Дауытов композиция дәресе бирә башланы, мин хәҙер шунда шөғөлләнәм. Был түңәрәктә беҙ профессиональ рәүештә музыка яҙырға өйрәнәбеҙ. Директорыбыҙ Эльмира Рафаил ҡыҙы яҙған шиғырға йыр яҙҙым, ул романс "Реквием" тип атала.

**Заһит:** Яттан шиғырҙар һөйләргә яратам, был йүнәлештә уңыштарым күп кенә: Аҡмулла исемендәге Республика йәш сәсәндәр конкурсында, Мостай Кәрим, Рәми Ғарипов уҡыуҙарында ҡатнашҡаным бар. Ҙур еңеүҙәремдең береһе 2011 йылда Мәскәү ҡалаһында классик башҡарыусыларҙың "Алтын Лира" Халыҡ-ара конкурсында оркестр менән Гран-при алыуҙы иҫәпләйем. 2012 йылда Ҡаҙан ҡалаһында "Арт-Форум" академик һәм халыҡ музыкаһын башҡарыусыларҙың III халыҡ-ара конкурсында беренсе урын алдыҡ. Был беҙгә Париж ҡалаһында үткән бәйгегә юл асты.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Моң тынмаһа, ғаләм мәңге йәшәр, тигән һүҙҙәргә ҡеүәт итеп, был уҡыу йорто, башҡорт халҡының уникаль шәхесе - оҫта йырсы, һәләтле музыкант, композитор, йәмәғәт эшмәкәре Ғәзиз Сәлих улы Әлмөхәмәтов исеменә тап төшөрмәҫкә тырышҡан уҡыусылар бар саҡта, башҡорт моңо бер ҡасан да тынмаясаҡ, тип кенә әйтеп булалыр...**

Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.




Шулай итеп, фекерҙәрем бер төйөнгә төйнәлә барҙы. Кисекмәстән Учалы яҡтарына барып ҡайтырға кәрәк ине. Тиҙ генә юлға сығып булманы. Ҡайһы бер шиктәрҙе белдереп, Ленинабад өлкәһенең Хаджентон районына Г.И.Черниковҡа хат яҙып һалыуҙан башҡа бер ни эшләнмәне.

Шул уҡ ваҡытта редакцияла Григорий Черниковтың хатын тәрләсә түкмәсләргә тотондолар, бәхәскә килгән-киткән ҡунаҡтар ҙа ҡушылды. Ә уларҙың араһында донъя күргән һуғыш ветерандары ла күп ине. Килгән берећенә һөйләп, үҙ юраумды уларҙа һынап ҡарау миңә ҡыҙыҡ ине. Берәүҙәр, хайран ҡалып, әҙләнеүҙе башларға дәртләндерҙе, икенселәре мәғәнәле генә итеп көләмһерәүҙән ары китмәне, өсөнсөләре иһә, Матросов хаҡында ауыҙ асыу менән үк ни өсөндөр һүҙҙе ситкә борорға тырышты.

Был йәһәттән бигерәк тә оло журналист Г. К. Базекиндың ҡыланышы сәйер тойолдо. Элекке хәрби офицер, сығышы буйынса Алыҫ Себер кешеһе, ләкин байтаҡтан инде Өфөлә йәшәгән Георгий Кириллович бер йыл алда ғына А. Матросов тураһында ыҡсым ғына китап баҫтырып сығарғайны. Был бик тә тынғыһыҙ журналист, пенсияла булыуына ҡарамаҫтан, байтаҡ әҙәрмәнлек эштәре башҡарып, Матросовтың әлегә тиклем билдәһеҙ фотоларын да тапҡайны. Ләкин уның йыйнаҡ ҡына китабы ни тиклем генә ҡыҙыҡлы булмаһын, яҙылышы буйынса күптән нығынған ҡалыптан ситкә сыҡмай ине: Саша бик тәртипле, башҡаларға һәр саҡ өлгө булған, үҙен бәләкәйҙән үк ҡаһарманлыҡҡа әҙерләгән һ. б. Ләкин бит шуныһы ла билдәле: китап кеүек яуаплы баҫма әҙерләгәндә, ғәҙеттә, тәрлә сәбәптәр арҡаһында уға инмәгән, файҙаланылмаған документтар, хәтирәләр ҙә ҡалғылай.

Г. К. Базекин редакцияға йыш килә, үҙ ғүмерендә бик күпте күргәнлектән, мауығып, фәһемле тәрлә ваҡиғалар тураһында һөйләй ине. Әммә А. Матросов тураһында һүҙ ҡуҙғатыу менән ул бер нимә аңламаған, ишетмәгән кеүек, хәбәрҙе ситкә бороп, бөтөнләй икенсе нәмәләр һөйләй башлай.

- Һеҙ, Георгий Кириллович, кеше әүрәтергә яратаһығыҙ, ә башҡаларҙы бер ҙә тыңлай белмәйһегеҙ икән, - тип, тупаҫыраҡ өндәшергә тура килде бер көндө. Ағай аптырап ҡалды, бынан һуң асыла төштө һәм иғтибарға лайыҡлы бер-ике ваҡиғаны һөйләп ташланы. "Күп йылдар элек миңә Өфө балалар колонияһында шофер булып эшләгән Коростелев менән әңгәмәләшергә тура килде,- тип башланы ул. - Ул миңә: "Бер мәл "колонистар"ҙы совхозға эшкә алып барҙым. Малайҙар араһында башлыҡ итеп тәғәйенләнгән Матросов кабинаға ултырҙы. Юлда һөйләшеп киттек. Һин ҡайҙа тыуғанһың, тип һорауыма ул Башҡортостандағы ниндәйҙер тимер юл станцияһын атаны", тип һөйләне".

Үкенескә ҡаршы, Г. К. Базекин ниндәй станция тураһында һүҙ барғанын иҫләй алманы. Иртәгеһенә үк мин Коростелев тигән кешене Өфөнөң Орджоникидзе районынан эҙләп ҡараным, тик ул вафат ине инде.

Г.К.Базекин балалар колонияһының уҡыу-уҡытыу бүлеге мөдире Л. В. Корепанова менән әңгәмәләшеүе хаҡында ла һөйләне. Бер көндө Лидия Васильевна китапханаға барып инә. Шунда гәпләшеп торған малайҙар уны абайламай. Уҡытыусы ҡолаҡ һала һәм балалар йортона урынлашҡан саҡта Сашаның, үҙенең тыуған ере тип үҙе бер ҡасан да булмаған ҡаланы әйтеүе тураһында көлә-көлә һөйләгән серен ишетеп ҡала.

Г.К. Базекин шул ваҡытта Л.В.Корепанованан ҡул ҡуйҙырып берәй яҙыу алмауына үкенеүен белдерҙе. "Исмаһам, документ булыр ине",- тине.

- Һуң, ул саҡта ишеткәнегеҙҙе һеҙ миңә яҙып бирегеҙ, - тинем мин. - Кәрәге булыуы мөмкин.

Ул үтенесте ишетмәмешкә һалышты, һуңынан яҙып килтерермен, тип, ҡатҡат вәғәҙәләр биреп йөрөнө-йөрөнө лә... ҡапыл үлеп китте. Бына бит ул, ҡайһылай үкенесле була.

Хәйер, Г.К.Базекин тағы бер серҙе әйткәйне. Бер мәл уға, мин Матросовтың апаһы булам, тип, Нижний Тагил ҡалаһынан бер ҡатын килеп йөрөгән, уға бер кемдең дә ышанмауына ғәрләнеп, илап ултырған, А.Матросов һәйкәленә сәскәләр алып барып һалған. Һуңынан Г.К.Базекин Нижний Тагил ҡала милицияһына, шул ҡатынды асыҡлауҙы һорап, хат та яҙып ҡараған. Әммә был мәшәҡәтләнеүҙән бер ни ҙә килеп сыҡмаған.

"Сәйер ҡатын" ды ҡасандыр Өфө ҡалаһының Киров районы хәрби комиссариатында ла күргәндәр. Был хаҡта миңә Бөйөк Ватан һуғышы ветераны М.С.Өмөтбаев хәбәр итте. "Етмешенсе йылдарҙың башында мин Киров районы хәрби комиссариатының 4-се бүлексәһе начальнигы булып хеҙмәт иттем. Бер көндө минең кабинетҡа 50 йәштәрҙәге ике ҡатын килеп керҙе. Әллә Силәбе, әллә Свердловск өлкәһенән ине улар. Хәҙер аныҡ ҡына хәтерләмәйем. Мин бында яңы кеше булараҡ, шунда эшләгән Ж. К. Данилова, А. А. Путинцева, Ф. М. Ғәлиеваға өндәштем. Ләкин улар, Матросовтың ҡәрҙәштәре күп булды инде, тине лә ҡуйҙы...

Шулай ҙа мин, ҡыҙыҡ күреп, Бөйөк Ватан Һуғышы осорондағы призывниктар кенәгәһен күтәреп ҡараным һәм А. Матросов исемен күрҙем. Ул һуғышҡа беҙҙең военкомат аша киткән икән.

Ҡатындар тураһында мин хәрби комиссар полковник Н. Я. Мардимасовҡа еткерҙем. Тик ул да, көләп: "Улар күп булды инде. Һиңә Николай Гастеллоның да туғандары килеүе бар - һин аптырама",- тине.

Ул ҡатындарҙың ҡулында алты-ете йәштәрҙәге бер малайҙың фотокарточкаһы һәм тағы ла ниндәйҙер хаттар бар ине. Мин уларға эске эштәр бүлегенә барырға кәңәш бирҙем, сөнки колония уларҙың ҡарамағында, ә беҙҙә бер ниндәй ҙә мәғлүмәт юҡ ине".

Бына ҡасан ысҡынған икән ҡулдан бер аҫыс! Әгәр полковник саҡ ҡына илтифатлыҡ күрһәтһә, бәлки, бөгөн эҙләнеп тороуҙың кәрәге лә булмаҫ ине. Ләкин был һөйләгәндәрҙән икенсе һығымта ла яһарға була ине: эҙләнеү эше унышлы ғына башлап ебәрелһә, уның һөҙөмтәһе, моғайын, ҡаһарманлыҡ сығанаҡтары тураһында ғына түгел, ә кешеләр — А. Матросов һәм уның ҡәрҙәштәренең фажиғәһе хаҡында ла буласаҡ. Шул саҡта, яҙмаларым был һыҡтап-илап йөрөгән билдәһеҙ ҡатындарғамы, шуның ише икенселәргәме, бәлки, ағай-энеһен табырға ярҙам итер. Һәр хәлдә, А. Матросовтың биографияһын асыҡларға тотонғанға тиклем үк үткән һуғыштың әсәтыны йөрәкте өтөп алғандай булғайны.

Быға тиклем дә архивтарҙа аҡтарынғанда, йыш ҡына ғәжәпкә ҡалғаным бар минең: ялҡауың ғына килмәһен, иҫке документтарҙан борон замандарҙа булып үткән бөйөк ваҡиғалар сылбырын тартып сығарыу ғына түгел, ә уларҙа үҙ тамырыңа ла барып юлығыуың ихтимал. Шунда борсолоу ҙа уянып ҡуя: әгәр боронғо затың, ҡәрҙәшең хаин, һатлыҡ йән булып сыҡһа? Унда бит, ҡәбер ташындағы кеүек, яҡшыһы ла, насары ла аҡҡа ҡара менән яҙып ҡуйылған...

Эйе, ихласлығың, түҙемең етһә, күп боронғо ғүмерҙәрҙе байҡарға була архивтарҙа. Тик бына ни бары 40-50 йыл элек булғандарҙы ғына белеүе ауыр. Эҙҙәр юғалған. Ни өсөн? Күрәһең, өйөр-өйөр машиналар, ажғырып, берберећенә ташланғанда, ҡатлы-ҡатлы таш йорттар гөрһөлдәп ауҙарылғанда, ер менән күк араһында мәхшәр тыуғанда, зәғиф кенә кеше яҙмышын ҡайғыртырлыҡ форсат булмаған. Күпме бала ут эсендә тороп ҡалған - быны берәү ҙә белмәй. Белмәйәсәк тә. Әммә иҫән ҡалды тигәндәренең дә күпмеһе осо-ҡырыйы күренмәгән ил киңлектәрендә аҙашҡан, бер-берећен юғалтҡан, үҙ исемен онотҡан - уларҙың да хисабына сығырлыҡ түгел.

Г. К. Базекин һәм М. С. Өмөтбаевтың иҡрар итеүе эҙләнеү эштәрен ниндәйерәк йүнәлештә башлап ебәреү кәрәклеген күрһәтә ине. Әммә бик тиҙҙән быңдай "йүнәлештәр"ҙең иҫәбе баштан ашып китте.

* * *

Мин Учалы районының Ҡунаҡбай ауылына юл тоттом. Миңә күптәнге дуҫым, колхоз председателе ярҙам итте - ҡалаға машинаһын ебәреп алдырҙы. Ләкин хәбәрсенең ураҡ эштәре менән ҡыҙыҡһынмағанын аңлап алғас, шунда уҡ һырт ҡуйып, бригадаларға сығып китте. Ауыл Советында эшләгән ҡатын-ҡыҙҙар арғы урамдан Фуат Әсәҙуллинды саҡыртты. Тиҙҙән ул килеп тә етте. Оло кеше шул, тыны ҡыҫылған. Шулай ҙа көләп, шаулап килеп күреште. Таныштыҡ, һөйләшеү, кәңәш ҡороу өсөн тағы бер нисә кешене саҡырырға булдыҡ.

Улар йыйылғансы, тағы Ғәзнәүи Ирғәлин тураһында һөйләшеп алдыҡ.

- Шикләнеүҙәремде белдереп, Тажикстанға хат яҙып һалғайным, ниңәләр яуап килмәне, -тинем мин.

- Ул бит вафат булып ҡалды, - тине Фуат ағай. - Быума ауырыуы менән яфалана ине, мәрхүм.

- Йә, әйтәм... Ә ҡайҙа эшләне ул?

- Белорет канат-сым заводында, унан - Ташкентта. Эшсе ине. Пенсияға китер алдынан тегеү фабрикаһында мастер булды.

Саҡырған кешеләр оҙаҡ күренмәне - көтөү ҡайта ине шул. Ахырҙа, Әсәҙуллин үҙе һүҙ башланы.

-Ҡустым, һиңә хат яҙып ебәргәс, Шакирйән тураһында күп уйлап йөрөнөм. Үҙемдең бергә үткән бала сағым иҫкә төштө, - тине ул, уйсанланып. - Минең атай йәй көндәре янғын каланчаһында янғын һүндереүсе булып хеҙмәт итте. Унда колхоздың иң яҡшы сабыш аттары торҙо. Элек Учалы яҡтарында һабантуйҙар ике көн бара торғайны бит. Шуға күрә Байрамғол яғы башҡорттары, төрлө ҡыңғырауҙар тағып, аттарҙы биҙәп, үҙҙәре боронғо кейемдәр кейеп, көнәлгәре, кисләтеп беҙҙең Ҡунаҡбай ауылы йылғаһы буйына килеп ҡунырҙар ине. Мин шунда бер көтөүсегә ике көн көтөү көтөшөп, дүрт һум аҡса алып, шуның ике һумын инәйемә биреп, ҡалғанына ике көнгә етерлек перәник, көнбағыш һатып алып, һыйланып йөрөй торғайным.

"Быларҙы ни өсөн һөйләй һуң әле Әсәҙуллин? Берәй хикмәте булмай булмаҫ", - тигән уй тыуҙы. Юҡ, ағай үткәндә, Шакирйәндең бала сағындағы мөхитте, тормош шарттарын тасуирларға итә ине шикелле. Был, ысынлап та, шулай булып сыҡты.

- Әле әйткән янғын каланчаһының кәртәнән эшләнгән түшәмендә, хуш еҫле бесәнлегендә аунап-тәгәрәй инек. Ул каланчанан 50-60 метр ғына арала Юныс ағайҙың "кетәклеге" күренә. Үҙе эшкә ярамағас, ул көн дә шул пожарҡаға килә. Уға Шакирйәне эйәрә. Юныс ағай һәр төрлө уйҙырма, әкиәттәр һөйләй. Мәҫәлән, имеш, ул Ленин бабай менән Ирәмәлдә лә, Бохарала ла булған, сүллектәрҙә уны ҡотҡарған, ә Ленин уға байлыҡ бирген, ул шуны, йәнәһе, йәшереп ҡуйған. Шунан беҙҙе эйәртеп, тимер таяҡ тотоп: "Бына шундараҡ алтын-көмөш күмдем, бындараҡ мискәләр менән таҙа егет булырға тейеш",- тип, беҙҙән эҙләтә. Беҙ ни, Шакирйән менән ышанабыҙ... Унан һыу инергә китәбеҙ. Һыуҙан сығабыҙ ҙа, йомшаҡ тал сыбығы осона мәте үләне йомарлап элэктереп, кем сәпкә тейҙерә ала, тип, йәҙәп йөрөгән ҡаҙҙарға тондорабыҙ: йә, күпме көләш алабыҙ, тип, һыу өҫтөнән таш осорабыҙ. Иң күп "көләште", ғәҙәттә, Шакирйән алыр ине. Юҡсыллыҡтан ул беҙҙән насарыраҡ кейенһә лә, бер ваҡытта ла моңһоу булманы. Бигерәк тә Шакирйән йәкәл, ашыҡ уйнарға, беҙҙең кеүек малайҙарҙы оторға оҫта булды.

1932 йылдан һуң шикелле, "немой" кино күрһәтә башланылар. Уны беҙгә Асыуҙы ауылынан Сәфәрғәли Хәйбуллин килтереп йөрөнө: үҙе кино күрһәтә, үҙе диктор урынына һөйләй. Электр энергияһы булмағас, билетһеҙ кергән малайҙар бүректәрен Сәфәрғәлигә биреп, динамоны әйләнә. Сәфәрғәли кире ҡайтышлай, ауылды сыҡҡас, алама бүректәрҙе бәреп китә. Шакирйән шул бүректәр ярҙамында кино ҡарап йөрөнө...

Әсәҙуллин хикәйәтен һөйләп бөтөрөп тә өлгөрмәне, бешеп-янып ҡуңыр йөҙлө ҡатын килеп инде - пенсиялағы уҡытыусы Лиза Миндиярова Баҡыева икән. Ишектә тағы берәү күренде - колхозсы Заманов Ғабдрахман. Тышта Дауыт Һиҙиәтовтың да ҡыҙыл машинаһы күренде. Тимәк, ҡайҙандыр ҡай-

***✓ Һуғыш бөткәс, Ирғәлин Ғәзнәүи ҙә килеп: "Егеттәр, Александр Матросов беҙҙең Мөхәмәтйәнов Шакирйән бит",- тип һөйләп торҙо. "Ә ни өсөн Александр?" тигәнгә, ул: "Башҡорт, тиһәң, рус малайҙары тынғы бирмәй", - тип аңлатты".***

тып төштө. Бына беҙҙең үҙенән-үҙе төҙөлгән эҙәрмәндәр "штабы" шул ине. Беҙ ике сәғәт самаһы әңгәмәләшеп ултырҙыҡ. Барыһына ла ҡағылып үттек. Ләкин мин күберәк шикләнеүҙеремде белдерҙем, ә яңы таныштарым, ҡыҙып-ҡыҙып, һәр шикте кире ҡаға барҙы, шунан төрлө фараздар йөрөттөк, нисек эҙләнергә, кем нимә башҡарырға тейешлеген уйлаштыҡ.

- Шулай ҙа тәүге һүҙҙе әйткән Ирғәлин уйландыра мине,- тинем мин. - Уға тулыһынса ышанырға мөмкин инеме? Ниңә ул үҙ серен һуңғы ваҡытҡа тиклем асмай һуҙған?

- Быны аңлатыуы еп-еңел,- тине Әсәҙуллин.-Тормошо шыма бармағанын онотмайыҡ. Пенсия юллағанда бар ҡурҡҡаны шул булған: йәшлеген иҫкә төшөрөп, кәртә ҡуйыуҙары ла мөмкин бит. Ә инде пенсияһын ала башлағас, барыһын да аҡҡа төшөрөргә осоро ла килде бит, егеттәр.

- Һуң, шикләнергә ни... Шакирйән тураһында Ғәзнәүи үҙе генә әйтмәй ҙә баһа, - тип һүҙгә ҡыҫылды Баҡыева. - Беләһегеҙме, мин был хаҡта 35 йыл элек ишеткәйнем инде.

- Нисек, 50-се йылдарҙамы? Әлегә тиклем өндәшмәй килдегеҙме?

- Өндәшмәнегеҙ тип ни... Ҡысҡырып та ни ҡылаһың. Дөрөҫлөктө нисәмә тапҡыр асырға тырышып ҡараныҡ, тик бөтә тырышлығыбыҙ юҡҡа сыҡты ла торҙо... 1953 йыл ине. Уҡыуҙы бөтөрөп ҡайтып, Учалы урта мәктәбендә бер йыл эшләгәс, РОНО мине Ҡунаҡбайға эшкә ебәрҙе. Уҡытырһың да, пионер эшен дә алып барырһың, тинеләр. Ярар... Йәшлек дәрте менән эшкә тотондом. Пионер отрядтарының әлегә ҡәҙәр ҡушылған исемдәре менән ҡыҙыҡһындым. Отряд ниндәй геройҙың исемен йөрөтә - шул герой тураһында күберәк белергә, материал йыйырға тейеш, тигән бурыс ҡуйҙым. Артабан йыйылған материалдарҙы тәртипкә килтереп, альбом сығарҙыҡ. Бына ошо ваҡытта, Матросов тураһында яҙылғандарҙы ҡарап ултырғанда, бер уҡыусым: "Апай, ул Матросовты олатайым беҙҙең Ҡунаҡбайҙыҡы ти",- тип хәбәр һалмаһынмы! Мин аптырап киттем. Дәрестең ахырын түҙемһеҙләнеп көттөм. Ҡыңғырау шылтырағас, туп-тура баланың олатаһына киттек. Олатай булған кеше лә, хәҙер мәрхүм инде, һаран ғына: "Эйе, ул Юныс ҡарттың улы була",- тине. Саша тураһында асыҡ бер нәмә лә әйтә алмаһа ла, ауылдағы оло йәштәге байтаҡ әбей, бабайҙарҙың исемен атап, шуларға барырға ҡушты. Коллективтағы уҡытыусы иптәштәр менән дә кәңәшләштем. Улар ҙа: "Уның ҡәҙәре генә беҙ ҙә беләбеҙ, - тиҙәр.- Иҫбатларлыҡ ҡына нәмә юҡ. Әйҙә, юҡ менән ҡаңғырма". Шулай ҙа был ваҡиға минең күңелгә тынғы бирмәне... Тормошҡа сығып, бала-сағалы булып кителде. Был осорҙа ул онотолоп торҙо. Бер аҙ баш-күҙ алғас, туҡта, мин әйтәм, тағы һүҙ ҡуҙғатып ҡарайым әле. Уйымды ирем Мирғәзимгә әйттем. "Бик ғәжәп хәбәр ишеттем бит әле, Мирғәзим", тим. "Ә ниңә аптырайһың уға, уны белеп һөрмәләтәләр, - ти уныһы ла.- Ә миңә уның менән осрашырға тура килде". Шаҡ ҡатырҙы бит! Бына шунан һуң мин Матросов тураһында яҙылған бөтә журналдарҙы, китаптарҙы уҡып сыҡтым. Был 1957-1958 йылдар ине. Ғәзнәүиҙең адресын табып, төрлө ергә хаттар яҙа башланыҡ: Оборона министрлығына ла, Совет Армияһының Үҙәк музейына ла, Днепропетровскиға ла - береһе лә ҡалманы шикелле. Бөтәһенән дә: "Беҙҙә бер ниндәй ҙә мәғлүмәт һаҡланмай",- тигән яуап килде. Бәс, шулай ҙа була икән: кеше шул хәтле батырлыҡ эшләгән, ә бер ерҙә бер документы юҡ.

- Ә Днепропетровскиҙан ни тип яҙҙылар?

- Шул бер үк нәмә инде: "юҡ" тип. Ахырҙа, унда үҙебеҙҙең уҡыусылар барҙы. Улар ҙа ғәжәпләнеп ҡайтты: иҫ киткес ҙур музей ойоштороғандар икән, ә Матросов хаҡында бер ниндәй документ та күрмәгәндәр. Әнүәр Бикчәнтәев ағай ҙа үҙенең романында Сашаның детдомдан ҡасып китергә әҙерләнгәне, аҙна-ун көн ҡайҙалыр юғалып тороуы тураһында яҙған бит. 1941 йылдың июнь аҙағын иҫкә ала ул. Тап ошо ваҡытҡа тура килә уның Ҡунаҡбайға килеп китеүе лә. Нимәгә таянып яҙыуын белеү өсөн Бикчәнтәев ағайға, адресын белмәгәс, кеше аша хат та ебәргәйнем. Тик ул танышым, үтенесегеҙҙе еткерҙем, тик һеҙҙе шатландыра алмайым, тип хәбәр итте. Әнүәр ағай, был хаҡта ишеткем дә килмәй, китапта яҙылғандар өсөн мине күп яуапҡа тарттырып йөрөттөләр, тип яуаплаған.

Оҙаҡ тыңлап ултырҙыҡ Лиза Миндияровнаны. Элек уҡытыусы булған, күп бала тәрбиәләп үҫтергән был ҡатын менән һоҡланмау мөмкин түгел ине. Донъя мәшәҡәттәре ишелеп ятһа ла, ул был эшкә тағы ни өсөн тотонған? Шул уйҙы уҡығандай, Баҡыева һүҙен былайыраҡ дауам итте.

- Шакирйән-Саша минең өсөн бер кем дә түгел. Әммә мин Ҡунаҡбай ауылына килен булып төшкәс тә көсөмдән килмәҫлек хыял менән йәшәй башланым. Әммә киләсәктә лә шулай йәшәйәсәкмен. Әгәр беҙҙең уйҙы кире ҡағыусылар бар икән, әйҙә, Шакирйәнде эҙләп бирһендәр. Шакирйән тере булһа, Ғәзнәүи кеүек, тыуған яҡтарына бер ҡайтмаһа, бер ҡайтыр ине бит?..

- Ә Заманов ни әйтер?- тип, мин ситтәрәк, тәҙрә яңағына һөйәлеп торған һөрөңкөрәк йөҙлө кешегә боролдом.- Һеҙ бит әле Ғабдрахман ағай? Һеҙ Шакирйәндең иптәше лә шикелле.

- Юҡ, йәшкә килгәндә, мин унан күпкә кесе. Мин 30-сы йылғы. Шулай ҙа барыһы ла күҙ алдында. Минең атайым Ҡотлозаманов Хәйерзаман. Шул Ҡунаҡбай ауылында тыуған, шунда йәшәгән,- тип бик алыҫтан башланы Заманов һәм хәбәрен шунда уҡ борҙо.- Юныс бабай минең атайҙы, Хәйерзаман еҙнә, тип йөрөттө. Минең атайҙың ике күҙе лә бөтөнләй күрмәй, ләкин аҡыллы ҡарт ине. Ә Юныс бабай, насар күреү сәбәпле, 1941 йылдың әллә июль аҙағы, әллә август айында, улы Шакирйәндән етәкләткән килеш беҙгә килеп инде. Ҡарттар оҙаҡ һөйләшеп ултырҙы. Русса бик таҙа белә ине Шакирйән. Ҡара костюм кейгән. Ике иң башы ҡабарып торғанға, ирмәк күреп, ҡул менән баҫып ҡараным. Әллә күгелйем, әллә аҡһыл көрән күлдәк кейгән. Башында бер нимә лә юҡ. Сәс ҡыҫҡа итеп ҡырҡылған, ләкин артҡа ятмай, тырпайып тора. Эре аҡ тешле, зәңгәрерәк күҙле, ҡоңғорт йөҙлө ине.

- Нисек ул тиклемен дә иҫләнегеҙ?

- Бала саҡтағы иҫтә ныҡ ҡала ул... Мин бәләкәйерәк булғас, ул мине әллә ни һанға һуғып та тормағандыр инде. Шулай ҙа, атайымдар сәй эскән арала, миңә уйынсыҡ эшләп бирҙе... 10-15 көн ауылда торғандан һуң ул тағы сығып китте.

* * *

Учалы ҡалаһының ҡунаҡханаһы. Ял көнө булғанға, бинала тып-тын. Бына бер саҡ бүлмә ишеген туҡылдаттылар. Ишекте барып астым. Унда урта йәштәрҙәге кеше тора ине. Асыҡ зәңгәр күҙле. Ҡабаланып килгәне күренеп тора. Инде, һаулаштыҡ. Ул, Сәхиулла Абдрахманов булам, тип күреште. Ҡунаҡбайҙан икән. Һуғышта ла ҡатнашҡан. Сик буйын һаҡлаған. Мин уны ул тиклем оло тип белмәгәйнем.

Абдрахманов тиҙерәк эшкә күсеү яғын ҡараны һәм ниҙер яҙылған дәфтәр битен тотторҙо. Бына ул: "Шакирйән бөтә уйындарҙа ла үҙен командир итеп тотто. Бик үткер егет ине. 1939 йылда ауылға ҡайтты, шунда уны һуңғы тапҡыр күрҙем. Өфөлә уҡыйым, эшләйем дә тине... Һуғыш бөткәс, 1956 йылда Ирғәлин Ғәзнәүи ҙә килеп: "Егеттәр, Александр Матросов беҙҙең Мөхәмәтйәнов Шакирйән бит",- тип һөйләп торҙо. "Ә ни өсөн Александр?" тигәнгә, ул: "Башҡорт, тиһәң, рус малайҙары тынғы бирмәй", - тип аңлатты".

Абдрахманов, бурысымды инде үтәнем, тик минең хатымды ла теркәп ҡуйығыҙ, тип, хушлашып сығып китте.

Шул уҡ көндө миңә Мирғәзим Кәримовтың хатын да килтереп тотторҙолар. Бына ни яҙа ине ул: "Шакирйән менән миңә 1941 йылдың июнь башында осрашырға тура килде. Ул ваҡытта миңә ун икенсе йәш ине. Ул беҙҙең һыу ингән ергә килде. Уның тиҫтерҙәре: "О! Шакирйән ҡайтҡан!"- тип геүләшеп киткәс, ул тыныс ҡына: "Егеттәр, ағайығыҙ инде Шакирйән түгел, мине Саша, Саша тип йөрөтөгөҙ",- тине. "Ҡайһы яҡтарҙан ел ташланы?"- тигән һорауға ул уйсан ғына: "Эх, егеттәр, минең булмаған ер ҡалмағандыр инде ул,- тине лә,- ә бында Украина яҡтарынан ҡайттым",- тине. "Ә һин бит детдомда инең?"- тигәс, ул: "Ә мин бөгөн - бында, иртәгә - тегендә. Улар минең ҡайҙа икәнемде белмәй... Минең ҡайҙа икәнлегемде үҙемдән башҡа бер кем дә белмәй",- тип өҫтәне. Культурно ғына кейенгәйне, тельняшка, уның өҫтөнән аҡ күлдәк, еңен терһәккә тиклем һыҙғанғайны. Ҡара салбар, ботинка ине. Ҡомда ҡыҙынған саҡта: "Теләйһегеҙме, мин һеҙгә фокус күрһәтәм",- тине лә ике усын асты. Унда сәй, асҡыс, йәкәл, ашыҡ кеүек нәмәләр ята ине. "Кемдеке, танып алығыҙ", тигәс, малайҙар салбар кеҫәләрен ҡапшарға тотондо. Ундағы әйберҙәр Шакирйән-Сашаның ҡулында булып сыҡты. Малайҙар ауыҙҙарын асып, хайран ҡалды... Өлкәндәр менән һөйләшкәндә, рус һүҙҙәрен ҡатнаштырып һөйләште. "Цыганская" һүҙе иҫтә ҡалған. Ошо килеүендә ауылда бер аҙна самаһы ғына булды, артабан һуғыш башланып китте".

Ошо хатҡа Л. М. Баҡыева үҙ ҡулы менән түбәндәгеләрҙе өҫтәгәйне: "Шакирйән кисен клубҡа килгән. Марш уйнағандар. Ҡунаҡ егет шунда матрос бейеүен бейеп күрһәткән.

Уңайһыҙыраҡ булһа ла, тағы бер нәмә өҫтәйем әле. Өйҙә телевизор ҡарап ултырғанда, мин Мирғәзимдән, Матросовтың ҡулында татуировка бар инеме, тип һораным. Ул көлдө лә: "Тәне сыбарланып бөткәйне. Тәненең тиреһе ҡорһағына тиклем буй-буй тельняшка һымаҡ буялғайны. Ә беҙгә иң ҡыҙыҡ күренгәне - осаһының бер яғында сысҡан, икенсе яғында бесәй һүрәте булыуы ине. Ул яланғас ҡала ла беҙгә атлап күрһәтә, шул саҡта бесәй сысҡанды тоторға ташланған кеүек хәрәкәт яһала. Беҙ, малайҙар, рәхәтләнеп көләбеҙ, тағы күрһәт әле, тип инәләбеҙ. Ләкин ул быны ҡабатламай, тиҙ генә кейенеп ала".

...Учалынан киткәндә, минең ҡуйын дәфтәрендә Шакирйәндең бала сағына ҡағылышлы тиҫтәләрсә мәғлүмәт тупланғайны. Улар ҡасан да булһа берберeһенә ялғанырмы, Шакирйән ысынлап та Матросов булып сығырмы, әйтеүе ауыр ине. Быны асыҡлау өсөн Ҡунаҡбай кешеләре Өфөнән, Стәрлетамаҡтан, Верхнеуральскиҙан, Тирләндән һәм тағы тиҫтәләгән урындан әллә кемдәрҙең исемдәрен әйтте. Үкенескә ҡаршы, был адрестар "шунда эшләй, фәлән урамда йәшәй шикелле" кеүегерәк кенә ине. Эстән генә көлөмһөрәнем дә ҡуйҙым: тик ул тиклем адрестар буйынса йөрөү өсөн миңә кем бирер икән мөмкинлекте? Эйе, алдағы мәшәҡәттәр ҡурҡытһа ла, мин Өфөгә ҙур ышаныс менән ҡайттым...

**РЕДАКЦИЯНАН:**

**Оло журналист, яҙыусы Рәүеф ағай Насировтың был хеҙмәте башҡорт һәм рус телдәрендә китап булып баҫылып сыҡты, уны китапханаларҙан табып уҡырһығыҙ, тип уйлайбыҙ. Әле беҙ ошондай хеҙмәт барлығын иҫегеҙгә төшөрөп кенә ҡуйҙыҡ. Александр Матросовтың ябай башҡорт егете Шакирйән Мөхәмәтйәнов икәне төплө дәлилдәр, әллә күпме документтар менән иҫбат ителһә лә, быны танырға теләмәгәндәр етерлек бөгөн. Шуныһы ҡыҙыҡ: танырға теләмәгәндәрҙең был фактты кире ҡағыр бер ниндәй дәлиле лә юҡ. Ундай дәлил булмаясаҡ та. Ә әлеге авторҙың һәм Учалы районы Ҡунаҡбай ауылы халҡының дәлилдәре кире ҡаҡҡыһыҙ. Нисек кенә булмаһын, беҙҙең Шакирйән Мөхәмәтйәнов миллиондар йөрәгендә тиңһеҙ батырлыҡ өлгөһө Александр Матросов булып йәшәй икән, әйҙә, шулай булһын. Ә беҙ уның менән Салауатыбыҙ менән ғорурланған кеүек ғорурланайыҡ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ТАЛАНТТАРҒА ҠАЛАЙ ЯРҘАМ ИТЕРГӘ?

Үтә йәш бер йырсының сығышын иғлан иттеләр. Халыҡ уны яратып, талантын баһалап өлгөргән, гөрләтеп ҡул саптылар. Мине лә арбаны уның йөрәкте өҙгөс моңо. Шул саҡ эргәмдә ултырған Әхмәт ағай Сөләймәнов, әле генә ошо егеттең "Ирәндек моңдары" конкурсында Гран-при алыуына тура-нан-тура ҡатнашлығы булған кеше, үкенес менән: "Их, сәнғәт институтын ташлаған бит был егет, шундай талант әрәм булмағайы", - тине. Йөрәк жыу итеп китте. Хәүефләнеп, егеттең йөҙөнә бағам: ҡалай ҡәнәғәт үҙ-үҙенән, ҡалай иркен тота үҙен сәхнәлә. Тимәк, ул үҙен уҡымаһа, талантын үҫтермәһә, һәләттәрен шымартмаһа ла ярай, мине барыбер яраталар һәм ҡабул итәләр, тип уйлай. Эйе, үҙ-үҙен тотошона ҡарағанда, ул мотлаҡ шулай тип уйлай торғандыр. Ә бит таланттарын ҡапыл йондоҙҙай балҡытып, халыҡ һоҡланыуын яулап, хушкүңеллелеге, битарафлығы арҡаһында баҙлап, хатта һүнеп ҡалған күпме ҡусты-һеңлеләрҙе күргән булды. Ҡапыл улар иҫкә төшөп, берәм-берәм күҙ алдынан үтте. Бер кисәлә шундай егеттәрҙең береһен - буласаҡ Мәғәфүр Хисмәтуллин, икенсеһен - буласаҡ Заһир Исмәғилев, тип иғлан иткәндәрен дә хәтерләйем. Был егеттәрҙе лә сәхнәләге феномен итеп ҡабул иткәйнек...

"Таланттарға ярҙам итергә кәрәк, талантһыҙҙар үҙ-үҙенә юл яра ул", тип ҡалай тапҡыр әйткән Станиславский. Бына ошондай талантлы, әммә битараф, ялҡау, үҙ-үҙенән ҡәнәғәт таланттарға ярҙамға ташланырға кәрәк. Араҡы ҡолона әйләнмәһә, ул ярҙам ҡабул ителергә тейеш...

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# БАҪҠЫС...

## иң яҡшы тренажер

■ Зифа буйлы булырға хыялланған ҡатын-ҡыҙҙар йыш ҡына шәкәрҙән баш тартып, шәкәр алыштырыусы ҡуллана. Күптәр был шәкәр алыштырыусыны организм өсөн бөтөнләй зарарһыҙ, тип иҫәпләй. Әммә уның составында ацесульфам йөрәктең ағзаларҙы ҡан менән тәьмин итә алмауына, цикломат бөйөр сирҙәренең көсәйеүенә килтереүе ихтимал. Шәкәр алыштырыусылар үт ҡыуығы юлдары сирҙәре менән яфаланыусыларға ла зарарлы. Ҡайһы берәүҙәр шәкәр урынына фруктоза, сорбит йәки ксилит ҡуллана, әммә улар калорияһы буйынса шәкәрҙән айырылмай. Табиптар фекеренсә, иң зарарһыҙы булып фруктоза тора, сөнки уның составында организмға зыян килтереүсе компоненттар аҙыраҡ.

■ Белгестәр әйтеүенсә, тап цивилизация ҡаҙаныштары кешегә ҙур зыян килтерә. Бөгөнгө кешенең тормошонда гигиена ла, комфорт та бар, әммә сәләмәт булыу өсөн иң кәрәклеһе булған хәрәкәт юҡ. Хатта балалар ҙа хәрәкәтле уйындарға ҡарағанда, компьютер уйындарын хуп күрә. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы (ВОЗ) үткәргән тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, Евросоюз илдәрендәге бөтә үлемдәрҙең 10 проценты - аҙ хәрәкәтләнеүҙән. Бындай хәл бөгөн күп илдәрҙә күҙәтелә. Кеше көндәлек тормошонда ни тиклем заманса ҡоролмаларҙы күберәк һәм йышыраҡ ҡулланһа, шул тиклем аҙыраҡ хәрәкәт итә. Бындай шарттарҙа, әгәр ҙә кеше үҙенә-үҙе ярҙам итмәһә, фән дә, медицина ла ярҙам итмәйәсәк, ти белгестәр.

■ Диетологтар лимонды организмды таҙартыусы иң яҡшы сара тип һанай. Ул организмдан шлактарҙы ҡыуа, махсус диета тотҡанда һәм физик көнекмәләр яһағанда был цитруслы үҫемлек артыҡ ауырлыҡтан ҡотолорға ярҙам итә. Бынан тыш, лимонда иммун системаһын нығытыусы, аллергия, туберкулез, ревматизм мәлендә хәлде яҡшыртыусы С витамины күп. Диетологтар лимондың ҡабығын да ашарға тәҡдим итә, сөнки уның составындағы пектин асығыу тойғоһон бер нисә сәғәткә баҫа.

■ Баҫҡыс бер ҡаттан икенсеһенә әләгеү мөмкинлеге биреүсе сара ғына түгел, ә тренажер ҙа икәнлеге күптән билдәле. Әммә уның файҙаһы булһын өсөн баҫҡыстан дөрөҫ күтәрелергә кәрәк, ти Роухемптон университеты ғалимдары. Белгестәр әйтеүенсә, бер юлы бер нисә баҫҡысты аша атларға ярамай, был саҡта калориялар әүҙемерәк янһа ла, ваҡ аҙымдар менән атлау улар менән яҡшыраҡ көрәшә. Ғалимдар иҫәпләүенсә, аҙнаһына биш тапҡыр 5 баҫҡыс аралығы үтеп, кеше 302 калориянан ҡотола ала.

■ Калифорния һәм Мадрид университеттары нейробиологтары ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәрҙең баш мейеһен, анығлап әйткәндә, хис-тойғолар һәм хәтер өсөн яуап биргән гиппокамп өлөшөн тикшергән. Һөҙөмтәлә ҡатын-ҡыҙ баш мейеһе формаһы буйынса ирҙәрҙекенә ҡарағанда бәләкәйерәк булһа ла, ҡатын-ҡыҙҙар уны әүҙемерәк ҡуллана. "ИноСМИ" баҫмаһы яҙыуынса, гиппокамп зурыраҡ булғанға күрә, ирҙәрҙең баш мейеһендә нейрондар күберәк була, был үҙ сиратында юғары аҡыл ҡеүәһенә килтерә. Әммә гүзәл заттарҙың мейеһе әүҙемерәк эшләй, шуға ла улар аҡыл йәһәтенән көслө заттан бер ҙә артта ҡалмай, ти ғалимдар.

ҺАБАҠТАР

# ҒИБРӘТЛЕ ХӘЛДӘРҘӘН...

## хикмәт таба бел

Аҡыллы кешеләр китап уҡығанда, төрлө-төрлө тормош хәлдәренә осрағанда, тыңлаған, ишеткән ғибрәтле хәлдәрҙән хикмәт таба белергә тейеш. Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) нәсихәте: "Хикмәт - ул иманлы бәндәнең юғалтҡан әйбере кеүек, уны ҡайҙа ғына тапһа ла алырға хаҡлы". Уйланырға мәжбүр итерҙәй, үрнәк булырҙай хәлдәрҙе уртаҡлаша йөрөргә кәрәк шул.

Совхоздар, колхоздар таралып бөткәс, ауыл халҡы көтөүсеһеҙ ҡалған көтөү кеүек билдәһеҙлектә интегә. Тап ошо осорҙа (исемдәр үҙгәртелде) Фән Сулпанов әле генә өйләнеп тормош башлаған ғәзиздәрҙән ғәзиз улын юғалта. Иманлы кеше, бәлә-ҡаза килһә - һынау, тип, сабырлыҡ менән ҡабул итә. Ул ваҡытта имандың ни икәнен дә белмәгән Фән үрһәләнә, өҙгөләнә, унда-бында бәргеләнә, хәсрәт утын нисек һүндерергә белмәй. Үҙе терелләй янып үлер хәлгә еткәс, юлында иманлы хәҙрәт осрай. Хәҙрәт уға: "Дин шишмәһе" һыуын эсмәһәң, йән әрнеүҙәрең, хәсрәттәрең утын баҫа алмаясаҡһың", - тип өгөт-нәсихәт бирә.

Фән бик ауырлыҡ менән доғалар ятлай, дини календарҙар, китаптар уҡый башлай. Доға уҡыу күнеленә тыныслыҡ килтерә. Хәләл ефете менән ҡалаға мәҙрәсәгә уҡырға йөрөй. Артабан Өфөлә "Мәрйәм Солтанова" исемендәге дини уҡыу йортон тамамлап, ауылында имам-хатиб вазифаһын башҡара башлай. Ләкин донъя көтөр өсөн аҡса ла кәрәк, үҙе лә, ҡатыны ла эшһеҙ. Аллаһы Тәғәләгә инанғас, ашаған ризығың, кейгән кейемеңдең, килем сығанағының хәләл булыуын да ҡайғыртыу фарыз бит. Фән ҡураһында һарыҡтар, мал, ҡош-ҡорт үрсетә башлай. Ер йөҙөнә һибелгән ялған ләззәткә ҡарап: "Нәфсеңә табынып, килә-сәкте юҡ итә икән динһеҙ кеше, һис кенә лә бәхетле була алмай, күңеле буш, һәр саҡ ниҙер эҙләй", - тигән һығымтаға килә. Йәйге иртәләрҙә таң атмаҫ элек уҡылған иртәнге намаҙ ләззәте, һуңынан һарыҡтарҙы көтөүгә алып сығып, урманда ҡоштар һайрауын тыңлау, быға тиклем һис бер ваҡыт иғтибар итмәгән, абайламаған, күрмәгән сәскәләр матурлығын, таңдың сихри мәлдәрен күреп ғәжәпләнә ул. Ялан аңғыратып аҙан әйтә, сүрәләр ятлай, йәнә ял итеп, яраларына түҙер сабырлыҡтар ала. Ҡатыны менән бергәләп малдың ҡайһыһын үрсетеү еңелерәк, көстән килерлек, килемлерәк икәнлеген үҙләштерәләр. Донъя, әхирәт эштәрен бер тигеҙ һыңғай алып баралар. Хаж ғәмәлдәрен дә башҡарып ҡайта Фән...

Был ябай ғына аңлы, иманлы, сәләмәт тормош үрнәге. Ошолай йәшәү һәр кемдең ҡулынан килерлек. Тик теләк, ниәт кенә булһын, матур, етеш йәшәргә форсат табыла ул.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА.**

# ЙӘЙҒОРМО?

## Ул туфандан ҡотолоу билдәһе

Күктәге йәйғор шул тиклем һоҡланғыс күренеш. Аллаһы Тәғәлә барлыҡҡа килтергән илаһи мөғжизә инде был. Бер яҡтан, йәйғор күреп, балалар кеүек шатланабыҙ, икенсе яҡтан, боронғо дини китаптарҙағы йәйғор тураһындағы мәғлүмәт хәүефләнеү ҙә килтерә күңелгә.

Нух бәйғәмбәр заманында халыҡ ныҡ аҙғынлыҡҡа бирелеп китә. Аллаһтың барлығын онотоп, үҙҙәре уйлап сығарған нәмәләргә табына башлайҙар. Аллаһ Нухҡа бәйғәмбәрлек бирә һәм Ул 950 йыл буйы халыҡты иманға саҡыра. Ошо арала ни бары 100-ләп кеше генә иманға килә. Нух бәйғәмбәр үҙе кәмһетеүҙәр, тукмауҙар кисерә. Кешеләрҙең ҡылығы үҙәгенә үткәс, Нух бәйғәмбәр Раббыһына: "Эй, Аллаһ, иман килтергәндәрҙән башҡалар дөмөкһен!" - тип доға ҡыла. Аллаһы Тәғәлә 40 көн буйы күктән ямғыр ҡойҙора, ер тишектәренән һыуҙар атылып сыға. 40 көн буйы өҙлөкһөҙ яуған ямғырҙан Ер өҫтөн тотош һыу ҡаплай. Аллаһтың бойороғо менән иман килтергән 100 кеше, ишле йорт хайуандары, ҡош-ҡорт ҡына был афәттән ҡотолоп ҡала. Ер өҫтөндәге һыу һурылғас, бик оҙаҡ ауыр еҫ тора. Шунда Аллаһы Тәғәлә әйтә: "Мин башҡаса халҡымды бер юлы юҡ итмәйәсәкмен. Болоттар өҫтөнә йәйғор урынлаштырам. Ҡайһы халыҡҡа ҡаза ебәрергә ярамағанлығын минә йәйғор иҫкәртеп торор" (Сәхәбә һәм беренсе быуын мосолмандарының бөйөк ғалимы Ибн Ғәббәс, йәйғор - туфандан ҡотолоу билдәһе, тигән. Ҡайһы бер ислам ғалимдары, йәйғор кереше булмаған йәйәнә хәтерләтә һәм ул ҡалҡҡан урында бер ҡасан да туфан булмаясағын аңлата, тип иҫәпләй. - **Ред.**)

2007 йылдан башлап беҙҙең Башҡортостаныбыҙ күгендә йәйғорҙар уйнап тора. Ул төрлө-төрлө рәүештә көньяҡтан да, төньяҡтан да, көнсығыштан да, көнбайыштан да, ҡояш тирәләй ҙә ҡалҡа. Эх! Уҡый белһәң икән йәйғорҙоң төрлө сүрәттәргә инеүенең нимә аңлатҡанын! "Эй, Аллам! Бөйөк көс, ҡөҙрәт эйәһе! Халҡыбыҙға яҙа ебәрә күрмә берүк. Халҡым һинең барлығыңа инанып, күпләп-күпләп иманға килә, намаҙ ҡыла, ураҙа тота, ҡорбан салдыра, хаж ҡыла. Гонаһтарын ярлыҡа халҡымдың!" - тип ялбаралыр, бәлки, Башҡортостаным өҫтөндәге был йәйғорҙар.

Ер йөҙөндәге иң боронғо, иң сабыр, иң ышаныслы, иң көслө һәм игелекле башҡортҡа Аллаһы Тәғәлә шундай матур сифаттар биргән икән, беҙ, еңелеү белмәгән ата-бабалар вариҫтары, донъяны баҫып барған ҡара көстәрҙе лә еңеп сығырға бурыслыбыҙ. Бының өсөн Аллаһы Тәғәләнең барлығына, берлегенә ышанып, ысын мәғәнәһендә мосолмандар булып, тәүфиҡ, әҙәп менән, тырышып эшләп, ил-йортобоҙға ҡот, бәрәкәт һорап йәшәү беҙгә фарыздыр.

**Зәлифә ШАКИРОВА.**
**Әбйәлил районы Аҫҡар ауылы.**

# ЙӨРӘКТӘРЕБЕҘҘЕ...

## иманға асайыҡ!

Эшкыуарҙар Миңзәлә һәм Ҡадурий Фазлетдиновтар Әлшәй районының Сурай ауылында үҙҙәре һалған мәсеттә дини байрам ойошторҙо, ҡорбан салды. Тәүҙә Нурмөхәмәт хәҙрәт Нуриев йыйылған ауыл халҡына, балалар, йәштәргә бик фәһемле дини дәрес үткәрҙе. Миңзәлә Вәлиулла ҡыҙы балаларға сүрәләр, доғалар йыйылмаһынан торған китаптар, ауылдаштарына 28 дана "Киске Өфө" гәзите яҙҙырып бүләк итте.

Халыҡ иманға һыуһаған. Аллаға шөкөр, һуңғы йылдарҙа кешенең рухи аслығы дөрөҫ юл менән ҡандырыла. Дини йолалар тергеҙелә, дини белем биреү йәнләнделә. Ҡайһы бер ерҙә был эш дәррәү күтәреп алына, икенсе урында эштәр һүлпәнерәк бара. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, дөйөм рух уяныуын күҙәтергә мөмкин. Сурайҙа үткән дини байрамға бәләкәй балаларҙың, мәктәп уҡыусыларының, йәш ҡатындарҙың килеүе, хәҙрәттең һөйләгәндәрен ихлас тыңлап ултырыуы ныҡ ҡыуандырҙы. Күңелгә йылы нур, өмөт һалды. Әйе, теге замандарҙа йәштәр менән оло быуын араһында бәйләнеш өҙөлә төшкәйне. Олатайөләсәйҙәр ҙә, ата-әсәләр ҙә балалары менән араны йырағайтҡайны. Быныңэҙемтәһе булып, туғанлыҡептәре бушаҡыуын, хөрмәт тойғоһо кәмеүен күрергә була ине. Ошо өҙәлгән быуындар бәйләнешен ялғауға үҙ өлөшөн индерергә тырышҡан Миңзәлә Вәлиулла ҡыҙы байрамға килеүсе ауылдаштарын: "Үҙегеҙ ҙә мәсеттәребеҙгә йөрөгөҙ, балаларығыҙҙы ла, күршеләрегеҙҙең балаларын да алып килегеҙ", - тип өндәне.

Беҙҙең быуынға ҡыйыныраҡҡа тура килде. Бала сағыбыҙ ҙа, йәшлегебеҙ ҙә динһеҙлектә үтте. Атеистар итеп тәрбиәләргә тырыштылар һәр кемде. "Бисмиллаһ" тип әйтергә лә ҡурҡа торғайныҡ. Әсәйем коммунист булһа ла, күңелендә һәр саҡ Аллаһы Тәғәләгә инаныу йөрөттө. Ологая төшкәс, намаҙға баҫты. Ул намаҙ ҡылғанда балаларыбыҙ өҫтөнә ырылып менеп китерҙәр, төрләсә ҡамасаулар ҙар ине. Ә ул иһә тыныс ҡына: "Ярай, ярай, йөрөһөндәр, зыян юҡ", - тип, балаларҙы ипле генә тыйып ҡуя торғайны. Үҙем дә, тыйыуҙарға ҡарамаҫтан, йәш сағымдан уҡ Аллаһы Тәғәләгә инаныуҙы күңелемдә йөрөткәнмендер, тип уйлайым. Бер ваҡыт әхирәтем менән Туҡай урамында урынлашҡан дауаханаға барҙыҡ. Ә ул дауахана янында мәсет бар. Йөрәгем шунда тарта. Әхирәтемә: "Әйҙә, Роза, мәсеткә инеп сығайыҡ", - тим. Комсомол ағзаһы булғас, унда барырға ярамағанлығын да беләм, күреп ҡалһалар, ҡыланышыбыҙ өсөн ҡаты шелтәләнәсәктәрен дә аңлайым. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, иптәш ҡыҙҙы мәсеткә инергә тәки күндерҙем. Йома, көн төштән һуңға ауышҡайны, кешеләр намаҙ уҡып таралышҡайны инде. Беҙҙе бик йылы ҡаршы алдылар, мөләйем йылмайып аралаштылар. Мәсеттән сыҡҡас, үҙемде оло батырлыҡ эшләгән кешеләй хис иттем. Шул уҡ ваҡытта Розаға: "Кешегә әйтә күрмә, белеп ҡалһалар, кәрәгебеҙҙе бирерҙәр", - тим. Беренсе ҡат мәсеткә барыуым оҙаҡ йылдарға сер булып ҡалды. Мәсеткә тағы ла барыу теләге булһа ла, ул мәлдә был теләкте тормошҡа ашырырға яҙманы. Хәҙер, Аллаға шөкөр, дин тоторға бер кем дә тыймай. Белем алырға теләгәндәргә уҡытыусылар, китаптар бар.

Кешеләр араһындағы рухи күперҙәрҙе, туғанлыҡ ептәрен нығытыу мөһим. Ошо юлда һәр кем үҙ ҡулынан килгәндәрҙе эшләһә, бик яҡшы булыр ине. Фазлетдиновтар Учалы районында ла, Әлшәй районында мәсеттәр һалып, уларҙа әленән-әле дини байрамдар ойошторол, күптәргә яҡшы өлгө күрһәтә. Киләсәктә, улар һымаҡ, дине, халҡы өсөн янып йөрөгәндәр артыр, һәр тарафта иманға әйҙәүҙәр йәнләндереләр, кешеләрҙең йөрәктәре дингә асылыр, тип ышанғы килә.

**Альбина ИСХАҠОВА.**

✓ *Әгәр һеҙ айына 15 процент ставка менән 30 йыл дауамында 200 доллар һалып барһағыҙ, билдәләнгән ваҡыт һуңында иҫәбегеҙҙә 1,4 миллион долларығыҙ булыр. Финанс именлеге шәхси азатлыҡҡа илтә.*



*МАТУР ХӘТИРӘ*

# МИЛЛИ ҒОРУРЛЫҠТАН...

## илһөйәрлек башлана

**"Киске Өфө" гәзитендәге милләт, милләттең киләсәге тураһындағы мәҡәләләрҙе уҡый бара, ҡулға ҡәләм алмай булдыра алманым. Үҙемдең йәшлек хәтирәләрен иҫкә төшөрҙөм, уларҙың бер-икеһен һөйләйем әле. Улар, әлбиттә, башҡорт абруйының юғары булыуына ишара.**

1965-1969 йылдарҙа индустриаль (хәҙерге урман хужалығы) техникумында уҡыным. Ул замандағы башланғыс хәрби әҙерлек дәрестәрен беҙҙә подполковник Раппопорт алып барҙы. Күкрәге тулы орден-миҙалдар таҡҡан ветеран башҡорттарға иҫ киткес яҡты, йылы мөнәсәбәттә ине. Гел генә Бөйөк Ватан һуғышында Кенигсбергты алғандағы хәтирәләрен һөйләп, "Мои башкиры", тип күҙҙәренә йәш ала торғайны.

Элек бит йәш белгестәрҙе йүнәлтмә менән эшкә ебәрҙеләр. Мин дә бригадир-механик булып, Чита өлкәһе Хушенга леспромхозына барып төштөм. Шулай ҙа элек кешенең ҡәҙере булған ул. Эшләп йөрөйөм ете ят тарафтарҙа. Милләтте һорайҙар, башҡорт, тиһәң, белмәйҙәр. Өфөнән, тиһәң, беләләр. Бер саҡ йомош менән тимерлеккә керҙем. Оло ғына йәштәге тимерсе эшләй ине, миңә бер аҙ көтөргә ҡушты. Шунан эште ярҙамсыһына йөкмәтте лә минең эргәгә сыҡты. Ҡайһы яҡтарҙан, ниндәй милләт икәнемде һораша башланы. Өфөнән, башҡортмон, тинем. Бәндә шулай күҙ алдында үҙгәрә икән. Үҙенең күп йылдар күрмәгән туғанын осраттымы ни! Шатланды, өйөнә саҡырырға тотондо. Шунан бер тарих һөйләй башланы: танкист булып һуғышҡан, бер саҡ танк эсендә янғандар һәм был яралы яугирҙы Өфө госпиталенә килтереп һалғандар, дауалағандар. "Вокзалдан йыраҡ түгел, Госпитальная урамында ине дауахана. Шундағы һинең милләттәштәрҙең, яҡташтарыңдың кешеләрсә мөнәсәбәте бер ваҡытта ла онотолмай", - тип һөйләгәне әле лә иҫтә. Аҙаҡ ҡарт яугир миңә төбәп: "Гордись, сынок, что ты башкир!" - тигәйне. Был һүҙҙәр бер ваҡытта ла онотолмай.

Шунан тура әрме хеҙмәтенә киттем. Танк бригадаһының бер ротаһына механик итеп тәғәйенләнеләр. Ул ваҡытта частарҙа фронтовик офицерҙар бар ине әле. Бригада комполиты полковник Цимбалист һәр бер кесе командир менән әңгәмәләшә. Минең Уралдан икәнде белгәс, хәтирәләрен башланы: "1942-1943 йылда Свердловск өлкәһендә Урал ирекле танк корпусы төҙөлдө. Фронтты һәр яҡлап - техника, танкистар менән дә бөтә Урал тәьмин итте. Экипаждарҙа башҡорттар, сая башҡорттар күп ине. Улар позиция тотһа, командованиеның күңеле тыныс булыр ине. Молодцы, башкиры!" - тип, мине арҡанан һөйөп бер булды...

Башҡортом тураһында ошо өс хәтирәне ғорурлыҡ тойғоһо менән һөйләйем һеҙгә. Етенсе тиҫтәне ҡыуған кешенең хәтирәләре күп инде ул. Ләкин бер ваҡытта ла ситтәрҙән башҡорт, ысын башҡорт тураһында ғәйепләү һүҙе ишетергә тура килмәне. Тик милләтенән оялмаған, балаларында милли рух тәрбиәләгән атай-әсәйҙәр һирәгәйә бара хәҙер беҙҙең яҡтарҙа. Ғаиләләрҙә "папка, мамка" һүҙҙәре йыш ишетелә. Ә бит киләсәктә ата-әсәне хафаға һалмаҫлыҡ тәрбиәлелек, илһөйәрлек тойғоһо, тап ошонан - үҙ милләтең, туған телең өсөн ғорурланыуҙан башлана. Ниңә онота икән шуны милләттәштәр?

**Фәрит ВӘЛИЕВ.**
**Белорет районы Зөйәк ауылы.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Һәр яңы көн - байрам

Ваҡытты ауыҙлыҡлағандан һуң минең өсөн көндәрҙе эш һәм ял, байрам көндәренә бүлеү бөттө. Даими рәүештә шундай һығымтаға килдем: бөгөн тере һәм һау-сәләмәт уяндым - был үҙе үк байрам. Бигерәк тә ял һәм байрам көндәрен яраттым, сөнки уларҙа ваҡытты үҙем теләгәнсә файҙалана ала инем. Ваҡытымды, Даниил Гранин әҫәренең бер геройы кеүек, ентекле итеп шөғөлдәр буйынса бүлеп ултырманым. Ғәҙәти көндәр өс өлөштән торҙо: йоҡо, эш ваҡыты, буш ваҡыт. Көндөң яҡты өлөшө, нигеҙҙә, таблицала күрһәтелгәнсә бүленде.

| **Йоҡо** | **Эш ваҡыты** | **Буш ваҡыт** |
|---|---|---|
| 22.30- 05.00 | 08.00-14.00 | 15.00 - 21.00 |

Көсөргәнешһеҙ, бер ритмда ғына эшләргә тырыштым. Уҡыу йылының үҙенсәлектәренә бәйле, буш ваҡытымдың ике-дүрт сәғәтендә алдағы дәрестәргә әҙерләндем, ял һәм байрам көндәрендә бының өсөн 4-6 сәғәт бүлдем. Ғаилә башлығы булараҡ, унең барлыҡ ағзалары өсөн шундай принцип булдырҙым: "Һәр кем үҙенең хеҙмәт бурыстарын тел тейҙермәҫлек итеп алып барырға тейеш". Балаларға медицина институтында барлыҡ дәрестәргә лә йөрөү мотлаҡлығын ҡәтғи һеңдерҙем. Мин уларға: "Хатта барлыҡ студенттар ҡасып ҡайтып бөткәндә лә, һеҙ ҡалырға һәм уҡытыусыны көтөргә тейешһегеҙ", - ти торғайным. Тормош иптәшемә, балаларға эштән йәки уҡыуҙан һорап ҡайтыу рөхсәт ителмәне. Ауырыу йомшартыусы хәл-торош итеп түгел, ә кешенең етешһеҙлеге итеп ҡаралды. Бындай осраҡтарҙа мин 80-се йылдарҙа КПСС-тың Сибай ҡала комитеты беренсе секретары Марат Резбаевтан ишеткән фекерҙе әйтә инем: "Бары тик түбән мәҙәниәтле кешеләр генә ауырый!" Ғаилә тормошон ойоштороуға бындай ҡараш үҙен аҡланы: ғаиләбеҙҙә ауырыған һәм бының менән ғорурланған кеше булманы. Һуңғы 18 йыл эсендә ғаиләбеҙҙәге дүрт кешенең береһе лә больничный ҡағыҙы алманы. СССР тарҡалғандан һуң больничный ҡағыҙы алыуы бөтөнләй еңелләште. Хатта коллегаларымдың күбеһе таныш табиптары аша йылына ике-өс тапҡыр үҙҙәренә социаль фонд иҫәбенә өҫтәмә ял ойошторалар ине. Беҙҙең ғаиләлә бындай ғәҙәт бер ваҡытта ла хупланманы. Минең байрам һәм ял көндәрем сәғәте-минуты менән шулай бүленде.

**Ваҡыт Ваҡыттың файҙалы итеп бүленеүе**

| | |
|---|---|
| 05.00 - 07.00 | Йоҡонан тороу. Йүгереү. Һалҡын душ ҡабул итеү |
| 07.00 - 09.00 | Инглиз телен өйрәнеү |
| 09.00 - 10.00 | Күлдәктәрҙе йыуыу |
| 11.00 - 12.00 | Китапты конспектлау |
| 12.00 - 13.30 | Төшкө аш әҙерләү. Төшкө аш. Яңғыҙ ҡалып ял итеү |
| 13.30 - 15.00 | Махсус әҙәбиәтте өйрәнеү |
| 15.00 - 16.00 | Иҙән йыуыу |
| 16.00 - 17.00 | Компьютерҙа эшләү |
| 17.00 - 19.00 | Киске аш әҙерләү. Киске аш. Ғаилә ағзалары менән көнүҙәк темаларға әңгәмәләшеү |
| 19.00 - 20.00 | Алдағы көндәрҙәге лекцияларҙың йөкмәткеһен ҡыҫҡырып һөйләү. Оҡшаған шиғырҙы ятлау |
| 20.00 - 21.00 | Яңы китап уҡыу |
| 21.00 - 22.00 | Йоҡларға әҙерләнеү |
| 22.00 - 22.30 | Ойоу |
| 22.30 | Йоҡо |

Был режим яҡынса ғына күрһәтелгән. Ҡайһы бер ваҡытта мин яҙма режим төҙөнөм. Һәр ваҡыт организмымдың тауышына ҡолаҡ һалдым. Ҡайһы бер ваҡыт фән менән ярты сәғәт кенә шөғөлләнеп, һуңынан икенсе эштәргә күсеп киткеләнем. Әммә бер принципты һис тайпылышһыҙ үтәнем: "Үҙеңде йонсотмаҫҡа!" Әйткәндәй, бөйөк рус педагогы К. Д. Ушинский тап ошо принципты ҡәтғи үтәмәүе арҡаһында донъянан иртә киткән - уның режимында физик күнекмәләргә һәм хеҙмәткә урын булмай. Тәмәке тартыуға бәйлелек уның сәләмәтлеген ҡаҡшата. Бынан тыш, ул бик ҡуҙғыусан кеше була. Былар барыһы ла ғүмеренең иртә өҙөлөүенә килтерә.

Көн тәртибенән күренеүенсә, минең аҡыл хеҙмәтем мейенең башҡа өлөштәре лә уйларға мәжбүр булған икенсе эшмәкәрлек менән аралаштырылып алып барыла. Әгәр тәүлегенә дүрт сәғәт аҡыл хеҙмәте менән шөғөлләнергә тура килһә, бер сәғәт булһа ла һул ҡул менән яҙырға тырыштым. Тап һул ҡул менән яҙыу миңә тәнемде генә түгел, аңымдың структураһын тулыһынса үҙгәртеү мөмкинлеген бирҙе, тип уйлайым. Һул ҡул менән яҙыу - эшмәкәрлектең тылсымлы төрө. Әгәр һеҙ даими ҡуҙғыйһығыҙ, нимәнәндер ҡурҡыу, ниндәйҙер ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо кисерәһегеҙ икән, һул ҡулығыҙ менән яҙығыҙ. Ашыҡмай, һөйөү менән, бар көсөгөҙҙө һалып, йөҙөгөҙгә йылмайыу сығарып, көнөнә 15 минут булһа ла яҙығыҙ. Тап 100 көндән һуң аңығыҙҙағы үҙгәрештәрҙе тойороғоҙға иманым камил. Бындай эшмәкәрлеккә бүленгән сирек сәғәт бер сәғәт эшһеҙ ултырған кеүек ял бирер. Һеҙгә, ошо яҙмаларҙы уҡыусыларға, барлыҡ ҡыйынлыҡтарығыҙҙың сәбәбен әйтәм: ул үҙегеҙгә алған бурыстарҙы үтәүҙәге эҙмә-эҙлектең юҡлығы. Бөгөн һеҙ кришнаит булып киттегеҙ ти, ә ике ай элек Иванов ысулын ҡуллана, бер йыл элек икенсе системаны үҙләштерә инегеҙ. Тағы ике айҙан тағы ла кемдәрҙендер сафын тулыландырасаҡһығыҙ. Минең кәңәшем шундай: бер генә нәмәгә тотоноғоҙ һәм кәмендә биш йыл буйы уны эҙмә-эҙлекле үтәгеҙ! Һуңынан динегеҙҙе, ҡағиҙәләрегеҙҙе йәки принциптарығыҙҙы алмаштырыу тураһында уйлаһағыҙ ҙа була. Барыһының да күҙ уңында булырға тырышмағыҙ, теге йәки был дингә ҡарауығыҙҙы кешегә күрһәтмәгеҙ. Үҙегеҙҙең булмышығыҙҙа ҡорам йәки мәсет булдырығыҙ. Яңғыҙлыҡтан ҡурҡмағыҙ, сөнки дөйөм эш башлағанда эргәгеҙҙә булған кешеләр ҡасан да булһа ситләшер һәм һеҙ ҡабат яңғыҙ ҡалырһығыҙ.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

83. Хыялығыҙҙы үҫтереп, визуалләштереү ысулын үҙләштерергә кәрәк: әгәр һеҙҙе нимәлер борсой икән, был проблеманы ҡағыҙға күсерегеҙ. Һуңынан уны яндырығыҙ һәм проблеманың нисек итеп янып көлгә ҡалғанын күҙәтегеҙ. Брюс Ли бындай алымды даими ҡулланған.

84. Проблемағыҙҙы киҫәктәргә бүлгеләгеҙ. Уның өҫтөндә уйланыу өсөн ваҡыт бүлегеҙ һәм штурмдың ентекле планын, уны хәл итеү варианттарын яҙығыҙ. Быны эшләгәс, ныҡлыҡ күрһәтегеҙ һәм ҡабат был проблемаға урап ҡайтмағыҙ. Кеше аңы шулай ҡоролған: онотторға теләгәнебеҙ ҡабат-ҡабат хәтергә төшә, ә хәтерҙә тоторға тырышҡаныбыҙ кәрәк ваҡытта иҫкә төшмәй ҙә ҡуя. Шул уҡ ваҡытта аң мускулға оҡшаш, уны ни тиклем күнектерәһең, ул шул тиклем көслөрәккә әйләнә. Уны үҙегеҙҙең хеҙмәтсегеҙ итеп алығыҙ. Уға иң яҡшы аҙыҡ һәм иң яҡшы мәғлүмәт бирегеҙ. Әгәр уға ышанһағыҙ, ул һеҙгә лайыҡлы хеҙмәт итер һәм мөғжизәләр тыуҙырыр.

85. Иң уңышлы кешеләр физик яҡтан азат һәм аң йәһәтенән әүҙем.

86. Аң-аҡыл рекорд һөҙөмтәләрен күрһәтһен өсөн тән физик йәһәттән азат булырға тейеш. Хәҙерге ваҡытта берәү ҙә аң менән тән араһында тығыҙ бәйләнеш барлығын инҡар итмәй. Тән барлыҡ көсөргәнештәрҙән азат, һығылмалы һәм йомшаҡ булғанда, аң да асыҡ, тыныс һәм диҡҡәтле була. Бына ни өсөн йога шундай яҡшы күнекмә. Ул тәнде көсөргәнештән арындыра, ә тән артынан аң да көсөргәнештән арына. Төп килелеү- һуҙылыуҙарҙы көнөнә 15 минут дауамында эшләү - шулай уҡ был ҡатмарлы, тиҙ ағышлы, әммә мөғжизәле донъяла көсөргәнештән арыныуҙың яҡшы ысулы. Шуға күрә тәнегеҙҙе көсөргәнештән арындырып, бындай мөмкинлекте аңығыҙға ла бирегеҙ.

